ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

15 йыл

23-29 сентябрь (һарысай)

2017

№38 (768)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Фекерләү һәләте...**
юҡҡа сыҡтымы, тыйып тотоламы?



3

**Сит илдә йәшәп тә...**
башҡортса өйрәнеп була



5

**Салауатыбыҙ...**
барыһынан бигерәк гәзеллек өсөн көрәшкән



6-7

**Йәмғиәтебеҙ ниндәй -**
матбуғатыбыҙ шундай



11,13

**ТВ-программа** 14

***Яҡшылыҡ менән яманлыҡ бер булмаҫ. Яманлыҡты игелегең менән баҫ. Ул саҡта һинең дошман күреп йөрөгән кешең дә дуҫың кеүек яҡын була башлар, арағыҙҙа дошманлыҡ бөтөр, дуҫ булып ҡалырһығыҙ. Был сифаттар сабыр кешеләргә бирелә.***

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘ...

## нығыраҡ тартылам

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ, Ырымбур егете Вячеслав Чернев, донъялағы 9 телде юғары кимәлдә белә, 30 телдә иркен аралаша ала. Әле ул Варшава университетының төрки телдәр кафедраһында докторантурала уҡый. Урындағы халыҡ уларҙың телен һыу кеүек эскән егеттең Рәсәйҙә тыуып үҫкәненә ышанмай, поляк тип уйлай, имеш. Хәйер, уның башҡортса һөйләшеү кимәле лә һәр башҡорттоң танауына сиртерлек. Ул тап-таҙа, бер ниндәй урыҫ һүҙе ҡушмай һөйләшә башҡортса. Шулай итеп, бөгөн беҙ ысын мәғәнәһендә полиглот Вячеслав ЧЕРНЕВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**



**Һин өйрәнгән телдәр исемлегендә башҡорт теле лә булыуы беҙҙең өсөн айырыуса ҡиммәт. Ни өсөн башҡорт телен һайланың?**

- Беренсенән, һүҙҙе тарихи башҡорт ерҙәре иҫәпләнгән Ырымбурҙа тыуып-үҫеүемдән башларға кәрәктер. Башҡорт, ҡаҙаҡ, татар балалары менән бергә уйнап үҫтем. Математика уҡытыусым татар апайы ине. Уның ярҙамында мин татарса өйрәндем. Һигеҙенсе синыфта уҡығанда ҡулыма ике битле гәзит килеп эләкте. Мин уны уҡып сыҡтым, аңланым, ләкин күп һүҙҙәр мәғәнәһе буйынса бер-береһенә яҡын булһа ла, татарса түгел икәненә иғтибар иттем. Уҡытыусыма күрһәткәйнем, ул был гәзиттең башҡорт телендә нәшер ителгәнен әйтте. Ниңәлер, был тел үҙенә йәлеп итте лә ҡуйҙы. Интернеттан башҡорт грамматикаһы китабы табып алып, уның ярҙамында телде үҙләштерергә керештем. Башҡорт Википедияһын уҡып, ундағы мәғлүмәттәрҙең йөкмәткеһенә төшөнөргә, уларҙы тәржемә итергә маташтым. Бер аҙҙан үҙем дә башҡорт телендә мәҡәләләр яҙа башланым, мәғлүмәт өҫтәргә ғәҙәтләндем. Беренсе эшем "Башҡорт әлифбаһы" мәҡәләһенә өҫтәмәләр индереү булды. Тәүҙә бик хаталы яҙа инем. Башҡорт телле интернет ҡулланыусылар, хаталарымды билдәләп, нисек дөрөҫ яҙырға икәнен аңлатты. Оҙаҡламай үҙем дә күп хаталарҙан арындым.

Бөгөн мәктәптәрҙә сит телдәрҙе өйрәтеү өсөн һүҙҙәрҙе ятлатыу системаһы өҫтөнлөк итә. Йәғни, уҡыусыларға яңы һүҙҙәр бирелә, ул киләһе дәрескә шуларҙы ятларға, иҫтә ҡалдырырға тейеш. Әммә тел һүҙҙәрҙән генә тормай. Унда грамматика, синтаксис, морфология, башҡа бүлектәр бар, йәғни сит телде өйрәнгәндә иң мөһиме - аралашыу. Мин башҡорт телен өйрәнгәндә грамматика, тел төҙөлөшө тураһында бер нисә китапты уҡығас, ҡағиҙәләрҙе хәтеремдә ҡалдырып, Википедияла, "Бәйләнештә", башҡа проекттарҙа аралашҡанда ҡулланырға тырыштым. Грамматика яғынан ҡараһаҡ, башҡорт теле урыҫ теленән ныҡ ҡына айырыла бит инде. Тәүҙәрәк һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушыу миңә ҙур ҡыйынлыҡ менән бирелде. Хәҙер инде хатаһыҙ яҙам һәм һөйләшәм, тип тулы ышаныс менән әйтә алам.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Яңы юл йөрөү ҡағиҙәләрен беләһеңме?

***Рәсүл ҒӘЙНУЛЛИН, "Башавтотранс" предприятиеһы водителе:*** Баш ҡалабыҙҙа пассажирҙар ташыу өлкәһендәге проблемаларҙың күплеге бер кемгә лә сер түгел. Пассажирҙарҙың бигерәк тә коммерция нигеҙендә эшләүсе маршруттарҙағы тәртипһеҙлектәр, иҫкереп бөткән һәм быҫраҡ ПАЗ-дарҙың торошона, шулай уҡ ошо маршруттар водителдәренең тупаҫлығына, уларҙың юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен һәм тиҙлек режимын боҙоу факттарына ҡарата зарланыуҙарҙы йыш ишетергә тура килә. Быныһы бер бәлә булһа, икенсенән, ошо маршрут микроавтобустары ҡатнашлығында аварияларҙың күбәйеүе бигерәк тә ҙур борсоуға һала. Яңыраҡ үҙәк гәзиттәрҙең береһе, 2017 йылдың тәүге яртыһында автобустар ҡатнашлығында аварриялар былтырғы ошо осорға ҡарағанда 1,5 тапҡырға артып китте, тип хәбәр иткәйне. Үкенескә күрә, беҙҙә лә бындай күңелһеҙ хәлдәр йыш булып тора. Айырыуса әле телгә алынған коммерция маршруттарында. Элек ошо системала эшләп киткәнлектән, ундағы хәлдәрҙе яҡшы беләм.

Әйткәндәй, тап ошо маршруттарҙа Урта Азия, Кавказдан килгән мигранттарҙың водитель булып ваҡытлыса эшкә ялланыуы ғәҙәти күренешкә әйләнде. Белеүемсә, Өфөлә йөҙҙән ашыу рәсми автобус маршруты булып, шуның ни бары утыҙлабы ғына дәүләттеке иҫәпләнә, ә 84-е коммерция нигеҙендә эшләй. Тәбиғи, "күләгәлә"эшләп, улар һалым да түләмәй, бер ни өсөн яуап та бирмәй. Бынан сығып, пассажирҙарҙың үҙҙәрен ни дәрәжәлә хәүеф аҫтына ҡуйыуын аңлауы ҡыйын түгел: билет та, лицензия ла юҡ. Ошо көндәрҙә "Авторадио"нан ишетеп ҡалыуымса, Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағына пассажирҙар ташыу өлкәһен лицензиялауҙы ҡабаттан ҡайтарыу тураһында закон проекты индерелгән. Ә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә иһә, шулай уҡ элекке тәртипкә кире ҡайтып, автобус һәм автомашиналарҙы юл-патруль хеҙмәте постарынан ситтә лә туҡтатып тикшереү хоҡуғы бирелә.

Оҙайлы стажлы водитель булараҡ, руль артына ултырып, юлға сығыусыларға 2017 йылға штрафтар күләме таблицаһына йышыраҡ күҙ һалып алырға кәңәш итер инем, сөнки был юҫыҡта ла яңылыҡтар бар. Тиҙлек яратыусыларға иң беренсе сиратта ҡағыла был. Мәҫәлән, тыйылған урындарҙа тиҙлекте 40-60 км-ға арттырған өсөн икеләтә күләмдә штраф һалыныуы ихтимал. Ҡайһы бер водителдәр йыш ҡына тулыһынса төҙөк булмаған автобуста рейсҡа сығып китә. Бының өсөн дә ул үҙ кеҫәһенән штраф түләргә мәжбүр буласаҡ. Әйткәндәй, ғибрәт өсөн бер факт: 10-24 июлдә Өфөлә үткәрелгән "Автобус" махсус операция барышында ғына ла төҙөк булмаған автобуста сыҡҡан 2312 водитель административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УҠЫҒАН ЙӘШТӘР ҠУЛЫНДА...

***Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, Рәсәй Федерацияһының V-VI саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, медицина фәндәре докторы:*** Донъяла барған хәлдәргә бәйге, ил киләсәге һәр кемдең күңелен борсоу һалалыр, моғайын. Бер нисә йылдан Башҡортостаныбыҙ ниндәй булыр, халҡыбыҙҙың йәшәйеше ниндәй үҙгәрештәр кисерер, балаларыбыҙҙы ниндәй һынауҙар, ниндәй ауырлыҡтар көтә, тигән һорауҙар һәр быуын өсөн көнүҙәк актуаль. Кешене өмөт йәшәтә, тиһәләр ҙә, өмөтләнеүҙең генә һөҙөмтәһе булмауы ла бар. Киләсәгебеҙ ышаныслы булһын өсөн бөгөндән үк хәстәрлек күрергә кәрәк. Шулай тибеҙ икән, тимәк, йәштәребеҙ өсөн йүнәлдерелергә тейеш беҙҙең бар ярҙам саралары, бар хәстәрләүҙәр. Һәм киләсәк өсөн яуаплылыҡтың ниндәй ҙур бурыс икәнен йәштәрҙең үҙҙәренә ныҡлап аңлата йөрөргә лә кәрәк.

Тормошта бөтәһе лә бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән, һәр нәмәнең нигеҙен белем тәшкил итә. Йәш быуын заман талаптарына яуап биргән белемгә эйә булыуҙан тыш, халҡыбыҙҙың тарихын, телен, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, сәнғәтен, архив материалдарын да яҡшы өйрәнһен, тип теләйбеҙ. Ә быларҙың бөтәһе лә йәштәрҙең уҡыуынан тора. Ғөмүмән, бөйөк мәғрифәтсе шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигән шиғри юлдары һәр ваҡыт актуаль булып ҡалырына шик юҡ. Беҙ шуны йәштәргә аңлатырға, балаларҙың аңына һеңдереп үҫтерергә тейешбеҙ.

Уҡыған кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмай, һәр ерҙә үҙ урынын таба. Ул ғына ла түгел, белемле кешенең аң кимәле юғары, донъяға ҡарашы киң, фекерләү ҡеүәһе үҫешкән була һәм ул үҙенең хоҡуҡтарын, бурыстарын яҡшы белә һәм донъяла барған ваҡиғаларҙы аңлай. Береү хоҡуҡтарын ғына белеп, туған телен белмәһә - ул халҡы өсөн түгел, үҙ мәнфәғәте өсөн көйгән кеше булып сыға. Икенсе кеше туған телендә яҡшы һөйләшеп тә, кәрәк саҡта уны һаҡлау сараһын күрерлек кимәлдә хоҡуҡи белеме булмаһа, ниндәй хәл килеп тыуыры көн кеүек асыҡ.

Әйтергә кәрәк, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаһы студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы менән берлектә эшләгән саҡта уҡ мин бөгөнгө йәштәрҙең бик аҡыллы, илһөйәр һәм тыуған республикаһы мәнфәғәтен ҡайғыртыусан, белемгә ынтылыусан булыуына инандым. Беҙгә, олораҡ быуын кешеләренә, уларҙың ошо илһөйәрлек тойғоһон дөрөҫ ҡуллана белергә, һәр эштә йүнәлеш биреп торорға кәрәк. Уҡыған, киң белемле, илһөйәр йәштәр ҡулында Башҡортостаныбыҙ киләсәге.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Яңы юл йөрөү ҡағиҙәләрен беләһеңме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА, автоһәүәҫкәр:*** Минең водитель стажы ҙур түгел әле, руль артына ултырыуыма ни бары өс кенә йыл. Шуға күрә юл йөрөү ҡағиҙәләренә ҡағылышлы һәр яңылыҡ менән ваҡытында танышып барырға, был өлкәлә оператив хәбәрҙарлыҡ өлгөһөнә эйә булырға тырышам. Яңыраҡ шулай баш ҡалабыҙҙың Беренсе май һәм Ульяновтар урамдары киҫелешендәге юлда ниндәйҙер ят һыҙаттар төшөрөлгәнен күреп, аптырап ҡалдым. Эшкә барғас, хеҙмәттәштәрем минә был турала аңлатып бирҙе. Бәктиһән, юлдар киҫелешендәге был шаҡмаҡ билдә әлегә тәжрибә тәртибендә төшөрөлгән һәм ул тағы ла Әй һәм Революцион урамдары киҫелешендә лә бар икән. Ә уның мәғәнәһе шунан ғибәрәт: тығын ваҡыттарында киҫелештең уртаһындағы һары һыҙатлы шаҡмаҡҡа сығыу тыйыла. Ул тыйылған зона тип иҫәпләнә - унда туҡтарға ярамай. Әгәр



водитель тығын ваҡытында ошо билдәгә сығып, арҡыры йүнәлештә килгән транспортҡа юлды ҡаплаһа, уға мең һум штраф һалына. Хоҡуҡ боҙоуҙар камералаҙа теркәлеп бара, тиҙҙән ошо юл саттарында видеокамералар ҡуйыласаҡ икән, үәт! Белмәгәндәр белеп ҡуйһын, тимәксемен.

***Ришат АБАЙҘУЛЛИН, ЮХХДИ хеҙмәткәре:*** Ҡайһы берәүҙәр йәйен генә түгел, көҙөн дә, ҡышын да, машинаһына бөтөн ғаиләһен тейәп алып, райондарға, ауылдарға, башҡа ҡалаларға ҡунаҡҡа, ялға сығып китеүсән. Күңелле һәм файҙалы сәйәхәттә кәйефте ҡырыусы көтөлмәгән мажараларға тармаҡ өсөн балалары менән сәфәргә йыйыныусы ата-әсәләр яңы юл йөрөү ҡағиҙәләре менән таныш булырға тейеш, тип уйлайым һәм "Киске Өфө" гәзите тарафынан бирелгән форсатты файҙаланып, уларҙы ҡайһы бер яңылыҡтар менән таныштырып китергә теләйем.

Мәғлүм булыуынса, ошо йылдың 12 июленән Рәсәйҙә балаларҙы машинала йөрөтөү буйынса тағы бер нисә яңы ҡағиҙә үҙ көсөнә инде. Мәҫәлән, хәҙер 7 йәштән кесерәк баланы машина салонында яңғыҙын бикләп ҡалдырған өсөн уның ата-әсәһе административ яуаплылыҡҡа тартылыласаҡ, йәғни 500 һум күләмендә штраф түләтеләсәк. Яңы ҡағиҙә буйынса шулай уҡ балаларға хәүефһеҙлек ҡайыштарын кейҙерергә тура киләсәк. Бынан тыш, 12 йәштән кесе балаларҙы мотоциклдың артҡы ултырғысында алып йөрөү ҡәтғи тыйыла. Балаларҙы юлда йөрөтөүгә ҡағылышлы башҡа төрлө ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн, йәғни машина тәҙәк булмаған хәлдә һәм әгәр ҙә унда балалар өсөн тәғәйенләнгән махсус хәүефһеҙлек саралары күрелмәгән осраҡта шулай уҡ штраф һалына. Уның күләме элеккесә - 3000 һум.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● **Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.** Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тынысллығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Быны өсөн һеҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, 50665 индексылы "Киске Өфө"гә - **554 һум 82 тингә**, 50673 индексылы һына (ойошмалар) - **584 һум 82 тингә** яҙылырға ғына ҡала. Ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары беҙҙең гәзиткә 499 һум 08 тингә генә яҙыла ала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **456 һум 00 тингә** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға бер данаһы **276 һум.**

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **276 һум.**

● **Бынан тыш, әлбиттә, оптимистар өсөн бүләктәр ҙә булмай ҡалмаясаҡ.** Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә онлайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн онлайн яҙылыу" һылтанмаһы аша **vip-ishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса (657 һум 42 тин) күсерергә генә ҡала.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышының пленар өлөшөндә 30-ҙан ашыу мәсьәлә ҡаралды, уларҙың 16-һы республика ҡанундары проекттары. Быйылғы йылға бюджет та яңынан ҡаралды. Был ағымдағы йылда республиканың дөйөм килеме артыуы менән бәйле. Депутаттар шулай уҡ цифрҙар, хәреф-һан тамғалары, һандар, вазифа, титулды аңлатҡан исем ҡушыуҙы тыйыу тураһындағы законды ҡабул итте.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов JVP холдингы директорҙар Советы рәйесе Виктор Пичугов менән осрашты. Әлеге ваҡытта компания "Русское зерно Уфа" холдингының идара итеүсе компанияһы булып тора, унда бер нисә ҡошсолоҡ фабрикаһы, Өфө икмәк продукттары комбинаты инә. Осрашыуҙа республиканың аграр сәнәғәт өлкәһенә инвестициялар йәлеп итеү мәсьәләләре ҡаралды.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр башҡорт телен өйрәнеү буйынса тәҡдимдәрен һәм уй-фекерҙәрен kurultay-ufa@mail.ru электрон почтаһына ебәрә ала. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов һүҙҙәренсә, ошо электрон почтаға килгән бөтә тәҡдимдәр башҡорт дәүләт телен һаҡлап ҡалыуға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән дәүләт программаһы проектын әҙерләгәндә иғтибарға алынасаҡ.

✓Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығы "Башҡортостан" киностудияһы" дәүләт унитар предприятиеһы етәксеһе вазифаһын башҡарыуға конкурс иғлан итте. Ғаризалар 23 октябргә ҡәҙәр ҡабул ителә, 30 октябргә йомғаҡ яһау билдәләнгән. Тест һынауҙарын уңышлы үткән һәм ин яҡшы предприятие эшмәкәрлеге һәм уны үҫтереү программаһын тәҡдим итеүсе конкурста ҡатнашыусы еңеүсе тип иғлан ителә.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә махсус ведомство-ара эшсе төркөм климатты үҙгәртеү һорауҙары менән шөғөлләнәсәк. Эшсе төркөм булдырыуҙың маҡсаты - республика иҡтисадына кире һаүа торошо эҙемтәләре ихтималлығын ваҡытында иҫкәртеү һәм саралар ҡабул итеү. Республика иҡтисадына миллионлаған зыян килтергән һуңғы ваҡытта йыш осраған тәбиғәт катаклизмдары - бик күп ҡар, ямғыр эшсе төркөм ойошторолуға сәбәп булып торҙо.

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ФЕКЕРЛӘҮ ҺӘЛӘТЕ...

## юҡҡа сыҡтымы, тыйып тотоламы?

**Фекереңде белдереү менән мәғлүмәт биреү тигән төшөнсәләр буталып китте бөгөн. Буталып киттеме, әллә быларҙың беренсеһе бөтөнләй булманыламы?**



Журналистика өлкәһен күҙ уңында тотам әле. Теләһә ниндәй башҡорт баҫмаһының берәй мәҡәләһен алып ҡара - мәғлүмәт бар, әммә фекер юҡ. "Шунда шул үтте, бик яҡшы булды йәки шундай закон ҡабул ителде, шул етәксе шулай тип әйтте", тигән, булған хәл-ваҡиғаны уҡыусыға еткерә торған хәбәр бар, ә шул ваҡиғаға авторҙың үҙ ҡарашы юҡ. Һәм ошо фекерҙең булмауы мәҡәләне тәҫһеҙләндерә лә. Сөнки бындай уҡ мәғлүмәтте ҡайҙан да ала алабыҙ, хатта урамда йә сиратта ултырғанда ла ишетергә була. Ә инде автор мәғлүмәтте үҙ ҡарашынан сығып йәки күпселек фекерҙәр менән сағыштырып бирә, уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә икән, һин уның фамилияһын да ҡарайһың - иҫләп ҡалаһың. Бынан ары был авторҙарҙың мәҡәләләрен дә эҙләп уҡыйһың, уның позицияһын беләһең. Барыһы ла яп-ябай - беҙҙә фекер, фекерләй белгән кешеләр эйәртә, арбай.

Элегерәк, мәҫәлән, "Киске Өфө" гәзитенең 3-сө битендә Таһир Ишкинин исемле журналистың донъя, ил ваҡиғаларын байҡаған сығыштары баҫыла торғайны. Ул ваҡиғалар тураһында был баҫманан алда сыҡҡан рус телендәге гәзиттәрҙән уҡыйһың, радионан ишетәһен, телевизорҙан ҡарайһың. Әммә мин ошо авторҙың гәзиттәге сығышын көтөп ала инем, сөнки ул был ваҡиғаларҙы башҡорт күҙеһе аңы нисек ҡабул итергә, нисек аңларға тейеш, шул юҫыҡта һүрәтләй, анализлай, һығымталар яһай, үҙ фекере артынан эйәртә ине. Әйткәндәй, бер мин генә түгел, бик күптәр шулай тип раҫлай торғайны Таһир Ишкинин яҙмалары буйынса...

Эйе, һәр кеше лә фекер инеше була, аҡылы теүәл булған берәү ҙә фекерһеҙ итеп яратылмай. Балалар, гәҙәттә, бер ҡатлы, әммә тура ғына итеп әйтеп ҡуя бит. Йәки оялмай, ҡурҡмай, ике йөҙләнәнмәй улар. Тик ололар уларҙы тыя башлай. Өйҙә, баҡсала, мәктәптә, йәмғиәттә тыйыла-тыйыла, баҫыла-баҫыла, әҙәм тигәндәрҙең күптәре фекерһеҙгә, йәки булған фекерен дә әйтә, тышҡа сығара алмаған кешегә әйләнә. Фекерен әйтә белгәндәр бәләкәйҙән "проблема" булып килә. Магазинда ул әсәһенә оҡшағанды түгел, ә үҙ күңеленә яҡҡанды һаттырып алдырып, тауыш сығара; баҡсала ятлап бөтөлгән уйынды "был минә ҡыҙыҡ түгел" тип әйтеп, тәрбиәсенең эшен ҡатмарлаштыра; дәрестә "мин аңламаным, ҡабатлағыҙ әле" тип, уҡытыусыларҙың йәнен көйҙөрә; коллективта йәки башҡа ерҙә уйһыҙ ғына ҡалыплашҡандарҙы үҙенсә баһалай белә.

Фекерле кеше масса ағымында йөрөмәй. Ҡаршы ла сыҡмай, әммә үҙ юлы була уның. Ул бер ваҡытта ла "бөйөк кешеләрҙең фекере", "профессор әйткән" йәки "шул яҙыусы шулай тип яҙған" тигәнгә таянмай. Сөнки дөйөмләшкән һәм ҡалыплашҡандан тыш, индивидуаллек бар һәм һәр кем өсөн үҙ донъяһының бары тик шул ек аша ғына ағып сыҡҡанын аңлай ул.

Журналистикаға әйләнеп ҡайтайыҡ. Ниндәй баҫмала баш мөхәррир хәбәрсеһенән: "Ҡайҙа бында һинең үҙ фекерең?" - тип һорай икән? Йәки журналисты фекерле ижад итергә өйрәтеүсе мәктәптәр бармы, ҡалдымы һуң? Мәктәп программаһында был методикаға урын бар ине бит (хәҙер ҙә барҙыр тип уйлайым). Әсәрҙе анализлағанда, инша яҙғанда төҙөлгән планда "Үҙ фекерең менән әйтергә" тигән пункт була торғайны. Тик әлеге тыйыуҙар, тыйыуҙарҙан ҡурҡыу, башҡалар фекеренең һинекенә ҡаршы булып ҡуйыуы алдында ҡаушау, фекереңде яҡлай белмәү, белемһеҙлек, үҙең әйткән йәки яҙған өлкәлә һай йөҙөү, мәғлүмәтле булмау, барыһына ла ярарға тырышыу кеүек кире сифаттар беҙҙә был пунктты үҫтерергә бирмәй, ахры.

Ни өсөн халыҡ үлеп ятып ток-шоуҙарҙы, бәхәсле тапшырыуҙарҙы ҡарай? Тыйылған баҫмаларҙы һатып ала? Шикле, әммә ҡыйыу телле сайттарҙа ултыра? Дөрөҫлөк, тапҡыр юл табам тип, аңлыш юҫыҡтарға ла китеп бара? Сөнки үҙебеҙҙең телдәге, үҙебеҙҙең менталитетҡа ярашлы фекерләшеү урындары юҡ. Беҙҙә фекереңде белдереү ниндәйҙер ҡалыптарға ҡаршы сыҡыу менән бер итеп ҡабул ителә. Ҡабул да ителмәй ул, сөнки был проблемаға халыҡтың төп өлөшө битараф. Ә уның лидерҙарына һәм лидерлыҡты иң фөрөс фекерле булыу һымаҡ ҡабул иткәндәргә был ауыр тәьҫир итә. Баҫмалардағы теге йәки был фекергә ҡарата "Ярай, ҡустым (йәки һеңлем), был һинең фекерең, ә бына мин ошолай уйлайым бит әле", тигән аңлы ғына яуапты ишетеү үтә лә һирәк күренеш. Фекер алышыу - бәхәскә, бәхәсте йәмһеҙ талашҡа әүерелдерәләр. Был инде күҙәтеүселәр өсөн көлкөлө бер тамаша ғына. Ҡарағыҙ, ниндәй абруйлы депутаттар, һөләтле артистар, башҡа билдәле шәхестәр матбуғатта, зәңгәр экрандарҙа, йәғни халыҡ алдында фекерен белдерә һәм башҡалар фекерен тыңлай алмауы арҡаһында ғына ла популярлығын юғалта, бәҫтәрен төшөрә.

Бер диалог ваҡытында республикабыҙҙың башҡорт мәктәбе директоры: "Бөгөнгө юғары синыф уҡыусыларында аралашыусыһына ҡарап фекер яраҡлаштырыу йәки үҙгәртеү төшөнсәһе юҡ ул. Алдашыу, хәйләләшеү, ярамһаҡланыу ҙа бик һирәк. Әгәр ошо быуын йәмғиәт тарафынан боҙолмай ғына аяҡҡа баҫа ала икән, ниндәй көслө, үҙаллы һәм аҡыллы алмаш киләсәк", - тигәйне. Күбенә өмөтләнмәй, шул быуындың ниндәйҙер бер өлөшө генә фекерле булыу ҡеүәһен һаҡлап ҡала алғанда ла, бик яҡшы буласаҡ. Шуға өмөтләнәйек.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

*ИШАРА*

# УЛАР БЕҘҘЕ ЯҠЛАЙ...

## беҙ ҙә уларҙы яҡлайыҡ!



**Тарихтың төрлө быуынында халҡыбыҙҙың батырҙары, данлы шәхестәре, абруйлы уландары күп булған. Улар милләт мәнфәғәте өсөн эшләгән, көрәшкән һәм күп осраҡта башын һалған. Улар халыҡты яҡлаған һәм, үкенескә күрә, халыҡ уларҙы яҡламаған...**

Бындай хәлдәрҙе тарихтан эҙләү ҙә кәрәкмәй, улар әле лә бар. Ил ағаһы дәрәжәһендәге, милләтте күтәргән шәхестәребеҙҙе, ил өсөн хеҙмәт иткәнендә данлайбыҙ-данлайбыҙ ҙа, вазифаһыҙ ҡалһа, яҡламайбыҙ. Бары "халыҡ-һарыҡ" позицияһында тороп ҡалыуҙы хуп күрәбеҙ...

Бөгөн Урал арьяғы үҫеше өсөн фиҙаҡәр хеҙмәт иткән, исеме легендаға әйләнгән шундай бер шәхестең баш осона ҡылыс күтәрелгән. Әле генә уның үҙе һәм һүҙе артында ышыҡ тапҡан, батырлығы һәм аҡылы менән ғорурланған халыҡ тағы ла шым булды...

Батырҙарҙың яҙмышы әллә шулай буламы икән? Улар шулай халыҡ өсөн баштарын һалырға, үҙҙәрен ҡорбан итергә бурыслымы? Әллә бары тик шулай ҡорбан булғандарҙы ғына батыр итеп күтәрәбеҙме? Ниндәй фәлсәфәгә нигеҙләнгән ул батырҙар яҙмышы?

Ә бит батырҙарҙы беҙ яратабыҙ! Бөгөнгө көндә халыҡ килешмәгән тәртиптәргә, закондарға ҡаршы тороп һүҙ әйтә алғандарҙы, ҡыйыу фекерҙәр менән сығыш яһаусыларҙы, килешмәүен белдереп яҙа һәм митингыларға сығып, байраҡ болғай торғандарҙы беҙ хуплайбыҙ. "Ай, азамат!" тип арҡаһынан ҡағабыҙ. Шул уҡ ваҡытта байраҡ болғамай ғына ла милләт мәнфәғәттәре өсөн айҡашҡан, башҡорт балаларын уҡытыу, башҡорттар төйәген етешерәк, хәллерәк йәшәтеү, башҡорт йәштәрен эшле һәм ашлы итеү өсөн тырышҡан ағайҙарҙың хеҙмәтен дә күреп торабыҙ. Улар тайшана ла, артҡа сигенә лә, һаҡлана ла белмәй. Улар шул юлдарын дан менән үтеп, үҙ-үҙҙәрен аңлы рәүештә ҡорбан итә...

Батырҙар позицияһы, ярай, аңлашылды ла, ти. Ә халыҡ позицияһы? Ниндәй ул? Ни өсөн ул үҙе үҫтергән батырҙарын, шәхестәрен яҡлай алмай? Ни өсөн халыҡ үҙенең ҙур көс, хатта иң ҙур көс булыуын аңламай? Быны төшөнгәнсе, эйәрер батырҙарыбыҙ ҙа, һаҡлар ерҙәребеҙ ҙә ҡалмай ҡуйыр кеүек...

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Хөкүмәтенең заказы буйынса Ағиҙел буйының төҙөлөшө тураһында биш минутлыҡ күрһәтмә ролик төшөрөлгән. План буйынса ул 2019 йылдың октябренә - республиканың 100 йыллығын байрам итеүгә тулыһынса тамамланырға тейеш. Хәҙер объекттың икенсе сиратын - "Йәшлек" спорт комплексынан Дуҫлыҡ Монументына тиклем участканы төҙөү буйынса эштәр бара.

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2025 йылға тиклем иҫәпләнгән "Республика моноҡалаларының комплексы үҫеше" өҫтөнлөклө төбәк программаһын ҡабул итте. Программаға ярашлы, 2018 йылдың аҙағына тиклем ҡала булдырыусы предприятиелар эшмәкәрлеге менән бәйле булмаған 9 мең эш урыны булдырыу, 30 млрд һум тирәһе инвестициялар йәлеп итеү ҡаралған. Программаны тормошҡа ашырыу өсөн 8,5 млрд һум тотоноласаҡ.

✓Литваның Вильнюс ҡалаһында халыҡ-ара шашка буйынса Европа командa чемпионаты бара, унда Рәсәй йыйылмаһы тулыһынса Башҡортостан вәкилдәренән - "Башнефть" профессиональ клубы спортсыларынан төҙөлгән. Ирегеттәр өсөн беренсе таҡтала - Александр Георгиев, икенсеһә - Айнур Шәйбәков һәм өсөнсөлә Муродулло Амриллаев сығыш яһай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа - команда капитаны Айгөл Иҙрисова һәм икенсе таҡтала Әлиә Әминова.

✓Рәсәй магазиндары кәштәләрендә импорт тауарҙар кәмей. Бының сәбәптәре төрлө, шуларҙың береһе - халыҡ-ара корпорацияларҙың Рәсәй территорияһына кәсеүе. Шулай уҡ йәшелсә етештереү йәйгә һалынған, 2015-2016 йылдарҙа 326 гектар яңы теплица төҙөлгән, күбеһе яңыса йыһазландырылған. 2016 йыл һөҙөмтәләре буйынса, ил халыҡты йәшелсә менән 92 процентҡа тәьмин итә алған. 2020 йылға тағы ла 1,8 мең гектар теплица төҙөү планлаштырыла.

✓Өфөләге 155-се лицейҙа Республика үҫмерҙәр автомәктәбе асылды. Ҡала инспекцияһында әйтеүҙәренсә, лицейҙа уҡыусылар өсөн юл хәрәкәте ҡағиҙәләре буйынса теоретик һәм практик дәрестәр индерелгән - улар 12 йәштән рулгә ултыра һәм инструктор күҙәтеүендә автодромда йөрөй ала. Ошондай мәктәптәрҙе ҡаланың һәр районында асыу, артабан тәжрибәне республика төбәктәрендә таратыу ҡарала. Шул рәүешле, автоинспекция яуаплы водителдәрҙең яңы быуынын тәрбиәләүгә ышана.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Өфө шулай уҡ 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһының баш ҡалаһы итеп һайланған һәм ЮНЕСКО-ның Ижади ҡалалары селтәренә инергә әҙерләнә.*



ҠЫҪҠАСА

# СПОРТҠА САҠЫРА МАЙҘАНДАР

✓ **Инорс микрорайонының 68-се лицейы территорияһында спорттың уйын төрҙәре менән шөғөлләнеү өсөн күп функциялы майҙансыҡ асылды.** Майҙансыҡ "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Ысын эштәр" һәм Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Өфө моторҙар төҙөү производство берекмәһе директоры Евгений Семивеличенко, Өфө ҡала округы Советы депутаттары Сергей Копысов менән Сергей Бубличенко инициативаһы менән башланған "Беҙҙең ихата егеттәре" проекттары ярҙамында төҙөлдө. Спорт объектын асыу тантанаһы ОДК-УМПО һәм Машина төҙөүселәр берлеге командалары араһындағы мини-футбол буйынса матч менән тамамланды.

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре менән берлектә автомобилдәрҙе парковкалауҙағы ҡағыҙә боҙоуҙарҙы асыҡлауын дауам итә.** Шындай профилактик рейдтарҙың маҡсаты - Өфө халҡына инвалидтар өсөн тәғәйенләнгән парковка урындарына үҙ транспортыңды урынлаштырыу Юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәһен боҙоу ғына түгел, ә әхлаҡһыҙлыҡ та икәнен төшөндөрөү. Инвалидтар өсөн тәғәйенләнгән парковка урынына автомобиль парковкалаған өсөн штраф күләме - 5 мең һум.

✓ **Үткән ялдарҙа баш ҡалала III Өфө халыҡ-ара марафоны үтте. Унда ҡатнашыусы спортсылар, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар һаны 3,5 меңгә етте.** Сарала Өфөнән тыш, республика халҡы ла, Рәсәй, шулай уҡ Көньяҡ Америка, Азия, Европа һәм Африканан спорт һөйөүселәр ҡатнашты. Маршрут ҡаланың тарихи урындары буйынса һалынғайны, йүгереүселәр Салауат Юлаев һәйкәле, Конгресс-холл, Ете ҡыҙ фонтаны, "Өфө-Арена" боҙ һарайы, Мостай Кәрим һәйкәле эргәһенән үтте. Финиш "Динамо" стадионында билдәләнгәйне. Марафонда өлкән йәштәгеләр ҙә булды. Уларҙың иң олоһона - Виктор Куликовҡа 82 йәш, ул 10 км араны йүгерҙе. 42,2 км араны үтеүсе спортсыларға наградаларҙы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов тапшырҙы.

✓ **Ленин районы коммуналь-торлаҡ хужалығы хеҙмәткәрҙәре ғаиләләре торлаҡлы булды.** Уларҙы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡотланы. Коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре өсөн 900 квадрат метр майҙанлы ятаҡ торлаҡ йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан. Унда бөтәһе 16 бүлмә, һәр берәһендә ремонт эшләнгән. Бөгөнгө көндә әүҙем, тырыш хеҙмәткәрҙәргә торлаҡ сертификаттары тапшырыу ҙа матур йолаға әүерелгән. Ә был өлкәгә республика райондарынан эшкә килеүселәргә ошондай ятаҡтар тәҡдим ителә. Ағымдағы йылдың ғинуар айында Киров районында ошондай ятаҡ асылғайны инде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ОЛО ВАҠИҒАҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**Башҡортостанда 2020 йылда IV Бөтә донъя Фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу өсөн яуаплылар билдәләнде. Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, Республика ойоштороу комитетының бер нисә эшсе төркөмө булдырылды. Мәҙәни программаларҙы ойоштороуға Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова яуаплы. Төркөмдә шулай уҡ Поленов исемендәге Рәсәй ижад йорто директоры Тамара Пуртова, Башҡорт дәүләт филармонияһы етәксеһе Айҙар Зөбәйҙуллин, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Артур Әлибәков та бар. Сараны финанс яҡтан тәьмин итеү өсөн мәҙәниәт министры урынбаҫары Айгөл Хәсәнова яуаплы. Сараны уҙғарыу урынын әҙерләү һәм ҡатнашыусыларҙы урынлаштырыу, транспорт, хужалыҡ һәм матди-техник тәьминәте, волонтерҙар хәрәкәте өсөн республика министры Руслан Мирсаяпов етәкселегендәге бер нисә эшсе төркөм яуаплы.Йәмәғәт именлеген тәьмин итеү менән - Ведомство-ара йәмәғәт именлеге советы секретары Алексей Касьянов, ҡатнашыусыларҙы туҡландырыуҙы ойоштороу менән - Сауҙа һәм эшҡыуарҙар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Гүзәл Аҫылова, сараны медицина йәһәтенән тәьмин итеү менән республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Әнүәр Бәкиров шөғөлләнәсәк. Медиатәьминәт эше Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары етәксеһе Борис Мелкоедов етәкләгән эшсе төркөмгә йөкмәтелә.

# ҺӘР САҠ АЛДА БУЛ!



**2017 йылдың 1 ғинуарына Рәсәй территорияһында халҡы 1 миллиондан ашыу булған 15 ҡала иҫәпләнә. Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө Волга буйы федераль округындағы миллионлы биш ҡала иҫәбендә инә. Өфөнән тыш, был исемлектә Түбәнге Новгород, Һамар, Ҡаҙан, Пермь бар. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығы урынбаҫары Илгиз Насыртдинов белдерҙе.**

Билдәләнеүенсә, халыҡ иҫәбе буйынса Өфө миллионлы 13 ҡала исемлегендә 8 урында килә. Был исемлеккә Мәскәү менән Санкт-Петербург ҡалалары инмәй. Ағымдағы йылдың 1 ғинуарына Өфөлә даими йәшәүселәр һаны 1126,1 мең кеше тәшкил иткән һәм алдағы йыл менән сағыштырғанда 4,7 мең кешегә артҡан. Тыуым коэффициенты буйынса Өфө икенсе урында һәм тәбиғи артым күрһәткесе һөҙөмтәһе буйынса өсөнсө урынға сыға. Ҡала предприятиелары 2016 йылда 640,7 миллиард һумлыҡ продукция оҙатҡан, был бер кешегә 569,9 мең һум тәшкил итә, был йәһәттән миллионлы ҡалалар араһында икенсе һөҙөмтәгә өлгәшелгән. 2016 йылда финанслауҙың бөтөн сығанаҡтары иҫәбенә 768560 квадрат метр торлаҡ төҙөлгән. Торлаҡ төҙөү күләме буйынса Өфө етенсе урында. 2016 йылда ҡаланың эре һәм уртаса предприятиелары ла һөҙөмтәле эшләгән. 114,4 миллиард һум килем алынған. Был күрһәткес буйынса Өфө Һамар ҡалаһынан ғына ҡалыша. Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа Өфө миллионлы ҡалалар араһында күп күрһәткестәр буйынса алдынғы урындарға сыҡҡан. Бөгөнгө көндә Өфө Рәсәй картаһында төп сәнәғәт һәм инвестицион үҙәк булараҡ билдәләнә.

# БЕЛЕМ АЛЫУСЫ ҠАЛА

**Был аҙнала Ирландияның Корк ҡалаһында ЮНЕСКО-ның белем алыусы ҡалаларының өсөнсө халыҡ-ара конференцияһы үтте. Уның төп маҡсаты - глобаль бәйләнеш булдырыу һәм урындарҙа "Белем алыусы ҡала" проектын тормошҡа ашырыу.**

Сара ҡалалар өсөн үҫеш программаһына булышлыҡ итеүсе план төҙөүгә йүнәлтелгән. Унда ҡатнашыусылар үҙҙәренең тәжрибәһе менән дә уртаҡлашты, артабан бергә эшләү өсөн партнерлыҡ мөнәсәбәттәрен нығыта алды. Конференцияның IV Тематик форумында ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов сығыш яһаны. Сынтимер Биктимер улы Өфөнөң мәҙәни, интеллектуаль, мәғариф үҫеше, ЮНЕСКО проекттарын тормошҡа ашырыу тураһында һөйләне. 2016 йылдан алып баш ҡала ЮНЕСКО-ның белем алыусы ҡалалары Бөтөн донъя селтәре ағзаһы булып торған Рәсәйҙең беренсе һәм әлегә берҙән-бер ҡалаһы. Өфө шулай уҡ 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһының баш ҡалаһы итеп һайланған һәм ЮНЕСКО-ның Ижади ҡалалары селтәренә инергә әҙерләнә. Һуңғы йылдарҙа республиканың баш ҡалаһы ҙур халыҡ-ара, Бөтөн Рәсәй форумдарын һәм мәҙәни проекттарҙы үткәреү майҙансыҡына әүерелде. Улар араһында ШОС һәм БРИКС саммиттары, Евразия гуманитар форумы бар.

# ТӨҘӨЛӨШ ФОРУМЫ



**Мәскәүҙә VI Рәсәй инвестицион-төҙөлөш форумы үтте. "2017 - төҙөлөш өлкәһендә институциональ үҙгәрештәрҙе тормошҡа ашырыу йылы" тигән темаға арналған сара Рәсәйҙең һәм донъяның төҙөлөш өлкәһендә эшләүсе эксперттарын, архитекторҙарын, финансистарын йыйҙы. Форум эшендә Халыҡ-ара баш ҡалалар һәм эре ҡалалар ассамблеяһы президенты, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты.**

Форумдың пленар ултырышында сығыш яһап, РФ төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалығы министры Михаил Мень киләһе йылдарҙа Рәсәйҙә Сочиҙағы Олимпиадаға һәм футбол буйынса донъя чемпионатына әҙерлек сиктәрендә төҙөлгән объекттар кеүек ҙур төҙөлештәр булмаясаҡ, шуға ла төүге урынға торлаҡ төҙөлөшө сығасаҡ, тип белдерҙе. Ул шулай уҡ ил буйынса сафка индерелгән торлаҡ күләме менән ҡәнәғәт булыуын билдәләне. 2018 йылда ла төҙөлөш әлеге кеүек темптар менән барасаҡ, тип фаразлана. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Рәсәй ҡалаларының күбеһе өсөн актуаль булған төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашыусыларҙың алданыуына бәйле проблемалы хәл итеү юлдарын тәҡдим итте. Форумдың икенсе көнөндә Ирек Ишмөхәмәт улы аҙ ҡатлы төҙөлөш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу, төҙөлөштә энергияны аҙ ҡулланыусы технологияlар файҙаланыу, уңайлы ҡала мөхите өсөн милли "йәшел стандарттар" булдырыуға арналған түңәрәк ҡорҙа ҡатнашты. Форум сиктәрендә РФ Төҙөлөш һәм торлаҡ коммуналь хужалығы министрлығының III Ҡала төҙөлөшө конкурсына йомғаҡ яһалды. Өфө "Нефтяник" стадионы реконструкцияһы өсөн "Социаль инфраструктура объектын төҙөүҙәге иң уңышлы тормошҡа ашырылған проект" номинацияһында еңеүсе булды.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2016 йылда Башҡортостан территорияһында атмосфераға 918,6 мең тонна бысратыусы матдәләр эләккән, уларҙың яртыһы автомобилдәр бүлеп сығарған ҡалдыҡтар. Стационар объекттар бүлеп сығарған бысратыусы матдәләрҙең 33 проценты Өфөгә тура килә. Эре заводтарҙа таҙартыу ҡоролмалары эшләй, ә бына ваҡ предприятиеларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеү ауыр, тип белдерә Башҡортостан буйынса Тәбиғәтте күҙәтеү идаралығы. Йылғаларға ҡойолған бысраҡ һыу күләме 277 миллион кубометрға етә. Йыл һайын республика 20 миллион тонна сүп сығара, уларҙың 1,1 миллион тоннаһы коммуналь ҡалдыҡтар. Рөхсәтһеҙ сүплектәр һаны 2,5 меңгә еткән.

✓Башҡортостанда "Ҡала мөхите" проекты буйынса 120 ихатала ремонт тамамланды. Быйылғы йылда бөтәһе 393 ихата һәм 35 дөйөм ҡулланыу территорияһы төҙөкләндереләсәк. Әлеге мәлдә Нефтекама, Яңауыл, Учалы, Дүртөйлә, Ағиҙел ҡалалары ихаталары төҙөкләндерелдә. Республика халҡы был эштә әүҙем ҡатнаша. Улар проекттың күҙәтеүсеһенән ҡатнашыусыһына әйләнде, тимәк, проект үҙенең маҡсатына өлгәште, тиҙәр проект авторҙары.

✓23, 24 сентябрҙә баш ҡала халҡын ауыл хужалығы йәрминкәләренә саҡыралар. 23 сентябрҙә Дим, Ленин, Октябрь, Орджоникидзе, Совет райондарында йәрминкәләр үтә. Калинин һәм Киров райондарында йәрминкә ике көн дауам итәсәк. Көндәрҙең йылы тороуы сәбәпле, махсус туңдырғыстар булмаһа, ит, ит продукттары, һөт ризыҡтары һатыу тыйыла. Үткән аҙналағы йәрминкәләр ҡаланың 14 майҙанында үткән, унда 41 райондан эшҡыуарҙар ҡатнашҡан. 35,3 тонна бал, 407 тонна картуф, 111 тонна йәшелсә һатылған.

✓Өфөлә Оло йәштәгеләр көнөнә оло йәштәге граждандар араһында "Көмөш Өфө" ҡала матурлыҡ конкурсы уҙасаҡ. Һайлап алыу туры 25-27 сентябрҙә Иҡтисад һәм сервис институтында ( Чернышевский урамы, 145) үтә. Конкурстың финалы 5 октябрҙә "ВДНХ-Экспо" күргәҙмә комплексында уҙа. Ҡатнашыуға ғаризалар kingdomelena@mail.ru электрон почтаһына, (347) 235-84-89 һандары буйынса факсҡа, шулай уҡ Октябрь проспекты, 114/1 адресы буйынса 3-сө бүлмәлә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: 235-97-66. Конкурс положениеһы ҡала хакимиәте сайтында бирелгән.

✔ *Әлеге көндә Башҡорт телен өйрәнеү халыҡ-ара системаһын ҡулланыусылар һаны биш йөҙгә етте, улар араһында студенттар ғына түгел, олораҡ йәштәге кешеләр ҙә бар.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СИТ ИЛДӘ ЙӘШӘП ТӘ...

## башҡортса өйрәнеп була



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты уҡытыусылары башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн яңы уҡыу йылына Башҡорт телен дистанцион өйрәнеү халыҡ-ара системаһы булдырҙы. Был турала юғары уҡыу йортоноң "Башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы" кафедраһы мөдире Сәлимә Таһировнанан тулыраҡ мәғлүмәт алдыҡ.**

- Башҡорт телен дистанцион өйрәнеү халыҡ-ара системаһы юғары уҡыу йортоноң ректоры Рәил Әсәҙуллин тәҡдиме буйынса эшләнде. Ул Татарстан Республикаһында татар телен онлайн өйрәнеү буйынса алты кимәлдән торған "Ана теле" проекты тормошҡа ашырылыуын күреп, башҡорт телен уҙаллы өйрәнеү мөмкинлеге биргән шундай проектты үҙебеҙ эшләп ҡарайыҡ, тигән инициатива менән сыҡты. Ҡаҙан ҡалаһынан коллегалар менән тәжрибә уртаҡлашып ҡайтҡас, башҡорт филологияһы факультеты уҡытыусылары юғары уҡыу йортоноң информацион-техник идараһы хеҙмәткәрҙәре менән берлектә эшләне. 2017-2018 уҡыу йылы башланыуға Башҡорт телен дистанцион өйрәнеү халыҡ-ара системаһы ҡулланыуға әҙер булды, бөгөн тел өйрәнергә теләгән һәр кем уҙаллы өйрәнеү курсын үтә ала.

Төрлө ҡушымталар, онлайн курстар ярҙамында тел өйрәнеү бөгөн бик киң таралған. Мәҫәлән, "LinguaLeo" - онлайн инглиз теле" сығанағы бик популяр һәм уны эшләүселәрҙән өлгө алырлыҡ. Төрки телдәргә ҡараған сыуаш, үзбәк, татар, ҡаҙаҡ һәм төрөк телдәре буйынса ла шундай махсус дистанцион өйрәнеү сығанаҡтары бар. Сыуаш телен өйрәнеү буйынса өс, үзбәк телен - ике, татар телен биш төрлө система аша уҡырға була. Башҡорт телен дистанцион өйрәнеү халыҡ-ара системаһы әлегә телде база кимәлендә өйрәнергә мөмкинлек бирә. Киләсәктә урта һәм юғары кимәлдә өйрәнеү мөмкинлеге биргән курстар эшләнәсәк. Билдәле булыуынса, бындай программалар ябай, телде еңел өйрәнерлек итеп төҙөлә. Шуға беҙ ҙә программаны башҡорт телен бөтөнләй белмәгән кеше лә башлап өйрәнә алырлыҡ итеп төҙөнөк.

Курс уры́ҫ телле тыңлаусыға тәғәйенләнгән, үҙ-ара бәйләнешле 21 дәрестән тора. Башҡорт телен башлап өйрәнеусе кеше Мәскәү егете Алексей менән бергә тәүге дүрт дәрестә башҡорт алфавиты, һуҙҙарҙың әйтелеше, транскрипцияһы менән таныша. Һәр дәрес бер нисә өлөштән тора: видеосюжеттар ҡарап, уларҙың эстәлеге буйынса күнегеүҙәр эшләү, аудиоматериалдарҙы тыңлап, фонетик, лексик, грамматик күнегеүҙәр башҡарыу, һүрәт менән аудиояҙманы сағыштырыу, һүрәт менән яҙманы сағыштырыу, тексты уҡып, дөрөҫ яуаптарҙы билдәләү, текста төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе урынына ҡуйыу, бирелгән хәрефтәр ярҙамында һүҙҙәр, бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙыу тәҡдим ителә.

Ғөмүмән, тел өйрәнгән кешегә ҡыҙыҡлы булһын, ялҡытмаһын өсөн күнекмәләрҙең бындай төрлөлөгө бик урынлы. Башҡорт телен өйрәнеү халыҡ-ара системаһы буйынса курсты теүәл үткән кешегә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына килеп, имтихан тапшырып, ҡулына сертификат алыу мөмкинлеге бирелә. Әлеге көндә Башҡорт телен өйрәнеү халыҡ-ара системаһын ҡулланыусылар һаны биш йөҙгә етте, улар араһында студенттар ғына түгел, олораҡ йәштәге кешеләр ҙә бар. Системаны һынап ҡарарға ингән кешеләрҙең тәҡдимдәрен һәм теләктәрен дә ҡабул итәбеҙ, инглиз теле аша башҡорт телен өйрәнеү мөмкинлеген булдырыуҙы һорауселар ҙа бар. Киләсәктә был йүнәлештә лә эшләргә уй бар.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТОМА ЕТЕМДӘРГӘ ЛӘ...

## социаль пенсия түләнәсәк

**РФ Президенты Владимир Путин ата-әсәһенең икеһе лә билдәһеҙ булған балаларҙы пенсия менән тәьмин итеү мәсьәләһенә ҡағылышлы федераль законға ҡул ҡуйҙы.**

Закон 2012-2017 йылдарға балалар мәнфәғәтендә Милли стратегия ғәмәлдәрен тормошҡа ашырыу сиктәрендә эшләнде. Был документты әҙерләүҙең сәбәбе шунан ғибәрәт: етем балалар өсөн ойошмаларҙан сыҡҡандан һуң йәки мәғариф учреждениеһын тамамлағандан һуң атаһы ла, әсәһе лә билдәһеҙ балалар финанс мөмкинлектәре йәһәтенән башҡа етем балалар менән сағыштырғанда тигеҙ булмаған матди хәлдә ҡала килде.

Ҡул ҡуйылған закон 2018 йылдың 1 ғинуарынан әлеге категория балалар өсөн яңы төр социаль пенсия түләүҙе ғәмәлгә индерә. Шулай итеп, ата-әсәһе билдәһеҙ балалар атаһын йә әсәһен йәки берҙән-бер аҫраусыһын юғалтҡан балалар менән тигеҙ күләмдә социаль пенсия аласаҡ. Законға ярашлы, яңы төр пенсия алыусылар иҫәбенә тыуыуҙары хаҡында дәүләт теркәүе эске эштәр органдары, опека һәм попечителлек органы, медицина ойошмаһы йәки тәрбиә һәм социаль хеҙмәтләндереү ойошмалары тарафынан табылдыҡ (ташландыҡ) баланың йәки бала тыуған (йәки әсә кеше сабыйы тыуғандан һуң мөрәжәғәт иткән) ойошмала әсәһе шәхесте раҫлаусы документһыҙ ҡалдырып китеүе хаҡындағы ғаризаһы нигеҙендә башҡарыла. Ҡыҫҡаһы, был тыуыу тураһындағы таныҡлығында атаһы ла, әсәһе лә күрһәтелмәгән (һыҙыҡ) булған балаларға ҡағыла. Атаһы ла, әсәһе лә булмаған балаларға социаль пенсия 18 йәше тулғанса түләнә һәм, әгәр ул уҡыу йорттарының береһендә көндөҙгө бүлектә белем алған осраҡта уҡыуын тамамлағансы һәм фәҡәт 23 йәшкә тиклем генә түләнә.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәнең матбуғат хеҙмәте.**

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ЙЫЛ БАШЛАНДЫ

✔ **Изге Мөхәррәм айының тәүге көнөндә - 21 сентябрҙә Һижри йыл иҫәбе буйынса Яңы йыл башланды.** Был көн мосолман байрамдары исемлегенә индерелмәгән һәм күп кенә мосолман илдәрендә Яңы йылды донъяуи аңлауҙағы кеүек байрам сифатында билдәләмәйҙәр, тип хәбәр итеlә календ.ру сайтында. Был көндө мәсеттәрҙә Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең 622 йылда Мәккәнән Мәҙинәгә күсеүенә арналған хәҙистәр уҡыла. Был дата мосолман календарының башы, ә Мөхәррәм айы мосолман календарының тәүге айы булып һанала. Кеше тәүге айҙы нисек үҙғарһа, ҡалған 12 айы ла шулай үтәсәк, тип иҫәпләнә. Мөхәррәм айы - Аллаһ бәхәс, ҡанлы үс алыу, һуғыш һәм шуға оҡшаш ғауға-низағтарҙы айырыуса тыйған дүрт айҙың береһе.

✔ **Синоптиктар иҫәпләүенсә, Рәсәйҙең Европа өлөшөнөң көньяғында һәм Урал федераль округында ҡыштың тәүге яртыһы былтырғыға ҡарағанда йылыраҡ булыуы көтөлә.** Башгидромет һауа торошона фаразларҙы баҫтырып сығарҙы. Башҡортостан буйынса ла фараздар әйтелгән. Мәҫәлән, октябрҙә температураның норманан 2,5 градусҡа юғары, ноябрҙә иһә уртаса йыллыҡ күрһәткестәрҙән 5 градусҡа һалҡыныраҡ булыуы көтөлә. Декабрҙә, ғинуарҙа һәм февралдә температура норманан -11, -14,8 градусҡа юғарыраҡ тәшкил итәсәк. Синоптиктар билдәләүенсә, һуңғы 17 йылда Рәсәй Гидрометүҙәгенең йылытыу миҙгеленә биргән температура режимы фаразлары яҡына 58-81 процентҡа аҡланған.

✔ **Башҡортостанда 3,16 миллион тонна иген йыйылған, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығында.** Бөртөклөләр майҙандарҙың 80 процентында сабылған (1,46 миллион гектар) һәм 80 процентында һуғылған. Көйөргәҙе, Стәрлебаш, Бәләбәй, Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр һәм Белорет районлары аграрийҙарына 10 проценттан кәмерәк йыйып алырға ҡалған. Бөгөн төбәк буйынса уңыш гектарынан 22,1 центнер тәшкил итә. Белгестәр мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылда уңыш былтырғыға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, әммә сифаты бер аҙға түбәнерәк.

✔ **Ҡырымдың Министрҙар советы Евпаториялағы балалар һәм ата-әсәләре менән балалар өсөн "Юбилей" кардиология клиник шифаханаһын бушлай Башҡортостанға тапшырҙы.** Ҡарар Ҡырым Хөкүмәте ултырышында ҡабул ителде. Балалар һаулыҡ йортон Башҡортостандың дәүләт милкенә тапшырыу буйынса бөтә процедуралар ҙа 2017 йылдың 21 декабренә ҡәҙәр тамамланырға тейеш, тиелә ҡарарҙа. Республика 2004 йылда төҙөкләндерелгән ике һәм өс ҡатлы корпустар комплексына эйә буласаҡ. Һаулыҡ йорто биләмәһендә парк, кинотеатр, спорт майҙансығы, сауна, китапхана, корттар, бейеү майҙансығы, медицина пункты, автостоянка урынлаштырылған. Ҡырым Башҡортостанға тапшырасаҡ Евпаториялағы "Юбилей" шифаханаһын төҙөкләндергән һуң ул Рәсәй Федерацияһында балаларҙы сәләмәтләндереүсе иң яҡшы учреждениеларының береһенә әйләнергә тейеш. Был хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡырым Башлығы Сергей Аксенов менән осрашыу барышында белдерҙе.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын һыу

❖ Тамаҡ шешмәһен йәки температура күтәрелмәһен өсөн аҙ ғына һалҡын һыу эсергә, ауыҙҙы көн дә һалҡын һыу менән сайҡарға кәрәк.

❖ Һалҡынлылығын арттыра барып, һалҡын һыу менән ҡойоноу ҙа һәйбәт нәтижә бирә.

❖ Һис ҡурҡмайынса 1 минуттан 10 минутка тиклем ялан аяҡ ҡарҙа йөрөргә кәрәк. Өләсәйем беҙҙе мунсаға ингәс, көрттә аунатып индерә ине хатта. Эске ағзаларҙың күбеһенең һуңғы нөктәһе табанда, ялан аяҡ һалҡынға баҫҡанда улар сыныға. Ғөмүмән, апрель айынан әйҙә һин тышта бер аҙ ялан аяҡ йөрөргә кәрәк.

### Үт ҡыуығы

❖ Бер үк күләмдә һары мәтрүшкә һәм меңъяпраҡ ҡатнашмаһынан сәй эсеү файҙалы. 1 балғалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30-40 минут йылы шәлгә урап торорға. Көнөнә бер нисә тапҡыр эсергә.

### Өләсәйҙәрҙән ҡалған һабаҡтар

❖ Әгәр аҡ төшкән күҙгә әтәс ҡанын һөрмә итеп тартһаң, аҡты бөтөрә.

❖ Әтәс тажын (кикереген) киптереп, аҫтына "бес иткән" кешегә бирһәң, файҙаһы тейер.

❖ Әгәр ҡыҙыл йәки аҡ әтәстең кикерегe менән аҡылы камил булмаған кешене тәтәсләһәң, файҙаһы тейә.

❖ Себеш итен ашаһаң, аҡылды арттырыр, тауышты сафландырыр.

❖ Тауыҡ итен йыш ашаһаң, эсәктәге ҡылйыландан (глисты) һәм аяҡ һыҙлауҙан ҡотҡарыр.

❖ Тауыҡ бүркәтәһендәге ташты быума сирле кешегә бәйләһәләр, файҙаһы тейер.

❖ Әтәс ҡойроғонон уң яғындағы ҡауырһынын өҙөп, йөнөн алып, гел биҙгәк тотҡан кешегә бәйләһәң, файҙа була.

❖ Йәш тауыҡ һурпаһы аяҡтар ҡалтырағандан, быуындар һыҙлауынан ҡотҡара.

❖ Йәш әтәс ите аҡылды арттыра.

❖ Ҡарт әтәс ите ҡаталауҙан файҙалы.

❖ Тауыҡ һурпаһын тоҙ менән ҡатыштырып ҡоҫһаң, үт ҡыуығы өсөн файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✔ **"Николай Икенсе менән Вильгельм Икенсене оҙатып йөрөгән отец Алексей уларға түбәндәге мәғлүмәтте бирә: был сиркәүҙе төҙөгәндә башҡорттоң кенәз Салауаты ҡатнашҡан һәм шул төҙөлөшкә 500 һум аҡса биргән".**



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Оло ҡайғы йылы

Әбү Талибты ерләүгә бер нисә көн үтеүгә Хәҙисә лә яҡты донъя менән хушлаша. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе был үлем дә бик ныҡ тетрәндерә. Егерме биш йылға яҡын бергә йәшәй улар. Хәҙисә тәү булып Мөхәммәттең бәйғәмбәр булыуын таный. Иң ауыр ваҡыттарҙа ла үҙененң ихлас мөхәббәте һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең хаҡлығына сикһеҙ ышаныс менән рухи төшөнкөлөккә бирелмәй, башҡаларҙы ла, хатта Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙен дә дәртләндереп ебәрерлек һүҙҙәр табып, ҡулынан килгәнсе ярҙам итеп тора. Үҙ тормошон иренә, уның бөйөк маҡсатына бағышлаған изге күңелле кеше була ул.

## Яҡлаусыһыҙ ҡалғас

Әбү Талиб яҡты донъяны ҡалдырғандан һуң, хашим нәҫеле башлығы булып Әбү Ләһәб ҡала. Ислам тәғлимәтененң төп дошмандарының береһе булараҡ, байтаҡ йылдар буйы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе нәҫелдән ҡыуыуҙы талап итеп килгән була ул. Мосолмандарға ҡарата мөнәсәбәтен Мәккәлә барыһы ла белә, шуға хатта бойкот та хашим нәҫеленән булғандарҙан уның бер үҙенә генә ҡағылмай үтә. Тик шулай ҙа ул нәҫел башлығы вазифаһын биләр алдынан хашимдарҙың йыйылышында Әбү Талибтың сәйәсәтен дауам итәсәге һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе рәнйетеүгә юл ҡуймаясағы тураһында белдерә.

Нәҫел башлығы булыу менән Әбү Ләһәб Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән ҡотолоу юлын эҙләй башлай. Күпмелер ваҡыт үткәс, башына бик мәкерле уй килә. Хашим нәҫеленең йыйылыштарының береһендә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән:

- Нәҫелебеҙҙең иң данлы, иң абруйлы кешеһе булған Әбд әл-Мотталиб олатайыбыҙ, ҡиәмәт еткәс, ҡайҙа эләгәсәк - ожмахҡамы, тамуҡҡамы? - тип һорай.

- Тамуҡҡа, - тип яуап бирә Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Әбү Ләһәбтең мәкерле уйы ошонан менән тормошҡа аша. Хашим нәҫеленән булған мәжүсиҙәр был һүҙҙәргә үпкәләй. Улар бит мосолман туғандарын яҡлап, ҡоралы һуғышҡа ла әҙер була, бойкот арҡаһында күбеһе бөлгөнлөккә төшә, башҡа нәҫелдәрҙән булған дуҫтары менән дошманлаша, ә Мөхәммәт бәйғәмбәр уларға һаман тамуҡ менән янай.

Киләһе йыйылышта Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе хашим нәҫеленән ҡыуыу тураһында ҡарар сығартыу Әбү Ләһәбкә ауыр булмай. Был ҡарар тураһында ул, Ҡәғбә янына барып, тантаналы рәүештә иғлан итә.

Ошо көндән башлап, Мөхәммәт бәйғәмбәр ырыуһыҙ кешегә әйләнә. Уны йәберләгән, хатта үлтергән осраҡта ла хашим нәҫеле кешеләренең ҡарымта хоҡуғы булмай. Иң яҡын туғандарынан башҡа. Иң яҡын туғандары иһә был хоҡуҡтарының барлығы тураһында Мәккә кешеләренең иҫенә төшөрә. Бының менән Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе яҙанан һәм үлемдән ҡурсалай. Сөнки улар менән ҡан ҡойош тотош хашим нәҫеле менән ҡарымта һуғышына килтерә алыуын Мәккә халҡы яҡшы аңлай.

Тик шулай ҙа Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тормошо ҡатмарлаша. Мәккә кешеләре уны урамда һүгә, бысраҡ бәрә. Йортоноң ишек алдын ҙур бер сүплеккә әйләндерә. Бынан уны иң яҡын туғандары ла ҡурсалай алмай, сөнки үс алыу хоҡуҡтары Мөхәммәт бәйғәмбәр үлтерелгән осраҡта ғына көсөнә эйә була ала.

- Әбү Талиб олатайым янымда булған саҡта былай ҡылана алмай инегеҙ бит һеҙ, - ти ҡорәйш мәжүсиҙәренә Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Былдай шарттарҙа вәғәзләү эшен Мәккәлә дауам итеү мөмкин булмай, әлбиттә. Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡаланан китеүҙе хәстәрләй башлай. Тик бара торған урыны булмай. Үҙе генә китергә булһа, ҡайҙа ла барып һыйыныр ине. Тик өммәттәштәрен ташлап китә алмай ул. Йәҙгә ҡалһын ғаиләне үҙе менән алып китергә тейеш була. Бер ырыу ҙа был хәтлем халыҡты үҙ ерҙәренә урынлаштырырға ашҡынып тормаясағын бик һәйбәт аңлай ул.

(Дауамы бар).

ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!

# САЛАУАТЫБЫҘ...

## барыһынан бигерәк ғәҙеллек өсөн көрәшкән

**Йәй айҙарында милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың һуңғы төйәге булған Эстонияның Палдиски ҡалаһында батырҙың һәйкәле яңыртылды. Был эштәрҙең уртаһында ҡайнаған зыялыларҙың береһе - Башҡортостан Республикаһының Милли музейы директоры Ғәле Фәйзрахман улы ВӘЛИУЛЛИН үҙ тәьҫораттары менән бүлеште.**

**➔ Ҡыҫҡаса ғына һәйкәл яңыртыуҙың тарихын беләйек?**

- Был сауаплы эштең планы 2014 йылда республика Хөкүмәте делегацияһы менән Палдискиға барғанда уҡ яралғайны инде. Сөнки 2000 йылдарҙың башында ултыртылған ҡалай һын, диңгеҙ ярындағы дымда ултырып, тишкеләнеп бөткәйне. Шулай уҡ әлегә тиклем таҡтаташ та юҡ ине. 2015 йылда Салауат Юлаевтың һынын республика Башлығының грантына Силәбе өлкәһенең Касли ҡалаһында ҡоростан ҡойҙорҙоҡ. Эстония етәкселеге менән таҡтаташ тураһында һөйләшеү ҙә алып барылды һәм унда буласаҡ яҙыуҙың эстәлеге хәл ителде. Сөнки был ябай ғына эш түгел, был сәйәси мәсьәлә лә. Шулай итеп, быйыл июль айында Эстонияла Палдиски ҡалаһының 299 йыллығын билдәләнеләр һәм беҙҙе лә саҡырҙылар. Ошо байрамға барғанда Салауаттың һыны яңыртылды ла инде.





**➔ Салауат Юлаевтың кем булыуын, йәғни уның ябай ғына тоткон түгел, ә тотош халыҡ өсөн уның исеме генә лә оло әһәмиәткә эйә икәнен беләме урындағы халыҡ?**

- Беләләр һәм батырыбыҙҙың рухына тоғрологобоҙҙо хөрмәт итәләр. Палдискиҙың рус гимназияһы бинаһында батырыбыҙҙың музейы өсөн ҙур класс бүлмәһе бирелгән һәм ул да яңыртып эшләнде. Палдиски - ул 4 мең генә кеше йәшәгән хәрби ҡаласыҡ. Был ҡаласыҡта Советтар Союзының һыу аҫты флоты базаһы булған. Бөгөн унда отставкалағы хәрбиҙәр, уларҙың ғаиләләре йәшәй. Шунлыҡтан, унда күберәк рус телендә һөйләшәләр, эстон телен бик һирәк ишетергә мөмкин.

Салауаттың ябай тоткон булмауын ул тоткон саҡта ла белгәндәр. Уны бында "кенәз Салауат" тип йөрөткәндәр. Ошо хаҡтағы төрлө тарихи ваҡиғаларҙы өйрәнгәндән һуң, "Арыш утрауы" тигән әҫәр яҙҙым. Швед телендә Рогервик "арыш утрауы" тигәнде аңлата икән. Әҫәрҙең эстәлегендә тарихи хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән яҙмалар ята. Шуларҙың береһен генә телгә алып китәм. 1790-1792 йылдарҙа Рәсәйҙең көнбайыш сиктәрен 1 мең башҡорт казактары һаҡлаған. Санкт-Петербургтан Вильно ҡалаһына тиклем башҡорт ғәскәрҙәре торған. Палдискиҙа Георгий Победоносец исемендәге сиркәү бар һәм шул сиркәү хеҙмәткәрҙәре бына нимә яҙып ҡалдыра: "1912 йылда Николай Икенсе Вильгельм Икенсе менән Палдиски ҡалаһында осраша. Батшаларҙы оҙатып йөрөгән отец Алексей уларға түбәндәге мәғлүмәтте бирә: был сиркәүҙе төҙөгәндә башҡорттоң кенәз Салауаты ҡатнашҡан һәм шул төҙөлөшкә 500 һум аҡса биргән".

Уйлап ҡараһаң, тотҡондоң ниндәй 500 һумы булырға тейеш? Шуны тикшереп ҡараным һәм бына нимәләр асыҡланым. Баш-

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ТАШМОРОНДОҢ...

## асылмаған серҙәре бар

**Сораман ауылы янындағы Ташморон (ундағы өңрәйеп торған таш хайуан моронона оҡшағас, халыҡ уға шундай атама биргән) - ауыл малайҙарының яратҡан төйәге. Һуңғы арала ауыл ағинәйҙәре лә, йылғаһын таҙартыу ниәте менән бында әллә нисә мәртәбә барҙы. Бигерәк тә уңа Ураҙа, Ҡорбан ғәйеттәренән аҙаҡ барып, хәжәт намаҙҙары, Ҡөрьән сүрәләре уҡыуҙы ғәҙәт итеп алдыҡ.**

Ташморон ҡаяһы төрлө "киәфәткә" инеүе менән аптырата килгән кешеләрҙе. Тәүге мәртәбә барғанда таш ҡая яугирҙарҙы, уларҙың береһененң муйынына уралған йыланды, ҡыямда тороусы ирҙәрҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һынландырғайны. Хатта Пушкинға тартым профиль дә күренә. Уның алдында китап. Бер ҡулын уң ҡолағы яғына күтәргән. Шуныһы ҡыҙыҡ: ваҡыт ағышында был һындар үҙгәреп тора.

Ислам дине һындарға табыныуҙан тыя. Шулай булһа ла, ҡыҙыҡһынған ағинәйҙәрҙең береһе ҡаяларҙы фотоға төшөрөп алды. Аҙаҡ фотоны ентекләберәк ҡараһаҡ, тигеҙерәк таш өҫтөндә ғәрәп графикаһы менән "Йәәсин" тип яҙылған һүҙҙе күреп ҡалдыҡ. Был ғәжәп күренешкә ҡыҙыҡһыныуыбыҙ йәнә артты. Йәй уртаһында тағы шул тарафҡа юл тоттоҡ. Биләмәгә инер алдынан Аллаһу Тәғәләнән рөхсәт һорапыҡ. "Йәәсин" тигән яҙыуҙы яҡынданыраҡ фотоға төшөрөү уйы менән Сәғиҙә Ғабдрахман ҡыҙы юғары үрмәләне. Ләкин... ни ғәжәп, фотола таштың ҡыҙыл төҫтәге фоны ғына сағылдырылғайны.

Өйгә ҡайтып, төшөргән фотоларҙы компьютерға күсереп, ундағы биттәргә янынан байҡау яһайбыҙ. Ҡая таштың мөктәре араһында һандар, ғәрәп графикаһы хәрефтәре шәйләнеп ҡалғандай була. Сентябрь башында, Ҡорбан ғәйетенән һуң, беҙ, дүрт ағинәй, йәнә Ташморонға йүнәлдек. Бының үҙенә күрә сәбәптәре бар: барған һайын үҙебеҙгә яңы мөғжизә асабыҙ. Был юлы ла "Аллаһ", "Ләиллаһи" һүҙҙәрен, төрлө хәрефтәр, символдарҙы абайланыҡ.

Арабыҙҙан берәүебеҙгә генә бер нәмә лә күренмәне...

Ташморон серҙәре асылырмы, юҡмы, белмәйем, әммә ул серҙәр ауылдаштарымды һәр ваҡыт үҙенә йәлеп иткән, йәлеп итеп тора бөгөн дә.

Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.
Учалы районы.



*Һулдан уңға "Йәәсин" тип яҙылғанға оҡшай.*

ҡорт һалдаттары ошо Палдискиҙа ла хеҙмәт итә. Ҡасандыр Польшала башҡорттар менән хеҙмәт иткән һәм бергә поляк ихтилалын баҫтырып йөрөгән Экбаум тигән офицер Рогервикта комендант булып эшләй. Шул комендант башҡорт һалдаттары менән башҡорт тотҡондарына бәйләнеш торорға рөхсәт итә. Ошо ике йылда беҙҙең башҡорт һалдаттары Салауат Юлаевҡа һәм Юлай Аҙналинға аҙыҡ, кейем, аҡса менән ярҙамлаша. Шул арҡала батырҙың сиркәүгә аҡса биреү мөмкинлеге булған, күрәһең. Минең уйымса, Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт иткән священниктарға был тарихты уйлап сығарып һөйләп тороу бер ни ҙә бирмәйәҙер. Етмәһә, ниндәйҙер сит халыҡ турағында улар буштанбушҡа ғына маҡталы уйҙырма сығармаҫтар ине.

➔ **Салауат ихтилалының шул замандағы сәбәптәре, маҡсаты һәм башҡа идеологиялары бөгөнгө күҙлектән ниндәйҙер үҙгәрештәр кисергәнме ул? Тарих был ваҡиғаны борғоламағанмы, мәғлүмәттәрен үҙгәртмәгәнме, нисек уйлайһығыҙ?**

- Советтар Союзы замаһында, большевиктар идеологияһына эйәреп, беҙ Салауат Юлаевты "башҡорт халҡын азат итер өсөн көрәшкән" тип һөйләнек. Хәҙер коммунистар юҡ, беҙҙә тапап килгән талаптар юҡ, яҡшы ғына итеп ултырып уйлайыҡ. Салауат Юлаев старшина балаһы - хәлле, уҡымышлы, данлы заттан. Ул үҙенең Рәсәй ҡулы аҫтында йәшәүен дә аңлаған. Рәсәй эсендә ниндәй азатлыҡ даулаһын ул? Кемдән азат булһын? Иленәнме? Ерҙәренәнме? Ул ғәҙеллек өсөн көрәшкән! Урыҫтар менән килешеү нигеҙендә йәшәгәндә, урындағы наместниктар шул килешеү ҡағиҙәләрен боҙоп, үҙ кәсәләрен ҡайғыртып, урындағы халыҡты иҙеп ҡыртлашҡан. Миҫал өсөн алғанда, Сим ҡалаһы Юлай Аҙналин еренә төҙөлә, ул был мәсьәлә буйынса ике тапҡыр судлаша, әммә дөрөҫлөк таба алмай - енелә. Салауат бына шул системаға ҡаршы сыҡҡан да инде.

Ни өсөн Пугачевҡа ҡушылып киткән һуң улар? Уның Пугачев икәнлеген һунынан тарихсылар иҫбат иткән, ә ул ваҡытта уны Петр Өсөнсө тип ҡабул итәләр. Ә Петр Өсөнсөнөң манифесында "Мин һеҙгә бөтә ғәҙеллекте бирәм" тип яҙылған була. Ошо "ғәҙеллек" тигән һүҙ хәл итә лә инде ҡушылыуҙы. Был һүҙ, әйтергә кәрәк, бөгөн дә актуаль.

➔ **Батырҙар психологияһы турағында уйланғанығыҙ бармы? Бына Салауат Юлаев, үрҙә һеҙ әйткәнсә, бай улы булған, ул гүмерен шул мулдыкта ла йәшәп үткәрә ала ине. Ә бит ул икенсе юлды һайлаған һәм халҡы өсөн үҙен ҡорбан иткән. Тимәк, батыр юлы - ул уның миссияһы, тап уға Аллаһ тарафынан һалынған яҙмыш йәки тағы нисегерәк итеп аңлатып була?**

- Батыр бер генә сәғәттә, бер генә көндә килеп сыҡмай. Буласаҡ батыр тыумышы, булмышы менән ниндәйҙер бер буласаҡ ваҡиғаға әҙерләнеп, шуға тәғәйенләнеп килә. Был эш донъяуи ғүмерендә уның йәнендә һалынған миссия. Халыҡ батыры булып, уның һөйөүен яулаған, тарихында уйылып ҡалған, артынан эйәртә алған кешеләр улар тулы, камил кешеләр була ла инде. Салауат Юлаев, мәҫәлән, бәләкәйҙән бик зирәк, уҡымышлы, сая бала була. Уның йәшләй генә айыу алыуы ла, сәсәнлеге лә, ҡурайсы булыуы ла, көрәшселеге лә һәм башҡа яҡшы сифаттары был шәхестең төрлә риүәйәттәрҙәге, мифологиялағы батырҙар образына бик яҡын. Ул бына ошолай итеп халыҡ күҙе алдында үҫешеп, этаплы-этаплы юлдар үтеп, әлеге тәғәйенләнешенә килеп етә лә.

Тағы ла, батырҙан батыр тыуа, тигән әйтем дә бар. Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин да бик батыр кеше була. Польша походында уға батырлығы өсөн генерал Бибиков шәп тоҡомло ун ат һәм "За веру и верность" тигән штандарт тапшыра. Польшанан Уралғаса юл бер айлыҡ ҡына булмай һәм Юлай Әлкәгә ҡайтып еткәнсе бер атын аҙыҡ-түлеккә алмаштырырға мәжбүр була. Тап ошо штандарт менән Салауат халыҡты күтәрә лә инде.

➔ **Салауаттан һорау алыу һәм уның яуаптары тураһында уйланғанығыҙ бармы? Нисек анализлайһығыҙ һеҙ был архив документтарын?**

- Ихтилал күтәрелеп баҫтырылған хәлдә лә, әбей батша Екатерина башҡорттарҙың Рәсәй дәүләтенә тоғролоғон белә. Сөнки Санкт-Петербург, Мәскәү, Екатеринбург ҡалаларында башҡорттар - жандармдар, Себер трактында конвоир булып хеҙмәт итәләр. Башҡорттар "Монетный двор"ҙы һаҡлай. Шундай яуаплы ерҙәрҙә хеҙмәт иткән халыҡ ҡыҫҡа ваҡыт арауығында, хатта бер нисә йыл эсендә лә икенсе төрлө булып китә алмағанын властар ҙа белә. Һәм уларҙың бары ғәҙеллек эҙләп ярһыуын да аңлай улар. Ошоно Салауат Юлаев та аңлай һәм башҡорттарға яза аҙыраҡ төшһөн өсөн документтарҙа яҙылғанса яуап бирәлер, тип уйлайым. Ул, башҡорттарҙы был ихтилалға көсләп ҡуштылар, тип әйтә. Үҙ хәлен былай ҙа төшөнә һәм күнә батыр, ул халыҡтың хәлен еңеләйтергә тырыша, шул ғына.

➔ **Салауат һәм Салауат кеүек башҡа батырҙарҙы, халыҡты ихтилалға күтәргән сәбәптәр бөгөн дә актуаль, шулай бит? Бөгөн шул мәсьәләләрҙе хәл итеү, тыныс юлдар менән милләт мәнфәғәттәрен яҡлап алып ҡалыу өсөн беҙгә ниндәй булыу кәрәк?**

- Белемле булыу фарыз. Яугир һәм ҡыйыу булыу ғына аҙ, бик аҙ бөгөн. Башҡорт балаларының күп телдәрҙе белеүе, теләһә ниндәй өлкә һәм йүнәлештәрҙә лә эшләй, эшләй генә түгел, ә етәкселек итә алыуы зарур. Газ, нефть һәм бизәр донъяһында, иҡтисад, сәйәсәт белемәләрендә лә иркен йөҙһөн ине милләттәштәребеҙ. Туған телде белеү, әлбиттә, мәслихәт, әммә уларҙы ошо сиккә генә бикләмәйек. Туған телгә тиңдәш итеп сит телдәрҙе лә өйрәнһендәр, шул белемде үҫештәрендә әүҙем ҡулланһындар. Белемле бишле йыһыр, ти бит. Шуның кеүек, белемле йәштәребеҙ сәйәсәттә лә, бизнеста ла, сәнәғәттә лә булып, һәр береһе милләт мәнфәғәтен ниндәйҙер кимәлдә булһа ла ҡайғыртһа ла, был үҙе ҙур көс була. Һәр кем үҙ урынында, үҙ эшендә хәленән килгән өлөштө индерергә, намыҫы һәм халҡы алдында бурысын үтәргә тейеш. Бөгөн ҡылыс һуғышы түгел, бөгөн аҡыл һуғышы бара. Шунлыҡтан, аҡыллы һәм белемле булайыҡ, милләттәштәр.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# МӘРЙӘМ СОЛТАНОВА

## Йәмәғәт эшмәкәре, меценат

**Мәрйәм Тимербулат ҡыҙы Солтанованың тыуған йылы билдәһеҙ. Атаһы Тимербулат Аҡсурин - Сембер эшҡыуары. Тормош иптәше - Арыҫланғәли Солтанов башҡорт дворяндары нәҫеленән.**

Мәрйәм Солтанова Ҡаҙан ҡалаһында ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһын тамамлай.

XIX быуатта Өфө ҡалаһында үҙ йортонда ҡыҙҙар өсөн рус-башҡорт училищеһы аса. Уҡыу бушлай була. Училище 1917 йылда ябыла. XX быуат башында махсус комитетты етәкләй. Был комитет мосолман малайҙары һәм ҡарттарына ярҙам күрһәтеүҙе төп бурысы итеп алған була.

1907 - 1913 йылдарҙа Мәрйәм Тимербулат ҡыҙы Өфөләге мосолман ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы рәйесе вазифаһын башҡара.

1913 йылда атаһынан мираҫҡа ҡалған йортто етем ҡыҙҙар приютына тапшыра. Ул 20-се йылдар башына тиклем эшләй. Мәрйәм Солтанова Өфөләге һәм губерналағы бөтә уҡыу йорттарына ярҙам күрһәтә.

Баш ҡаланың Туҡай урамындағы 33-сө йорт Мәрйәм Тимербулат ҡыҙыныҡы була. Ул 1890 йылдар тирәһендә төҙөлгән. Әле был бина архитектура ҡомартҡыһы иҫәпләнә.

Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мәҙрәсәһе Мәрйәм Солтанованың исемен йөрөтә.



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Үҫәргәндәр

Үҫәргән ҡәбиләһенең боронғораҡ атамаһы - мөйтән. Риүәйәттәр буйынса үҫәргәндәрҙең юлбашсыһы Мөйтән бей булған. Үҫәргәндәрҙең боронғо ырыуҙары - сураш, айыу менән бүре, сураштан бүленеп сыҡҡан - бишәй, бишул. XVII-XVIII быуаттарҙа үҫәргән ырыуҙарының төп ерҙәре - Һаҡмар, Таналыҡ, Оло һәм Кесе Эйек йылғалары буйҙары. Үҫәргәндәрҙең ҙур булмаған төркөмдәре Ырғыҙ, Кәмәлек йылғалары буйҙарында, һуныраҡ Һарытау губернаһының көньяғында, Оло һәм Кесе Үҙән йылғалары буйында урынлаша.Үҫәргәндәр составында 100-ләгән ырыу араһы атамалары иҫәпләнә. Билдәле булған 120 ырыу атамаларының 80-е түгеләренең варианттары булып тора, был үҫәргән ҡәбиләһенең тотороҡло булыуы хаҡында һөйләй.

Үҫәргән башҡорттарының хандары һәм бейҙәре: Башҡорт - (XI б.); Төкләҫ баба (XI б.); Тырма (XI б.); Ҡаҙансы (XI б.); Ишламҡыя (XII б.); Ҡараҡыя (XII б.); Ҡотлоғыя (XII б.); Тоҡсаба (XII б.); Мөйтән бей (20-30 йй. XIII б.) Сыңғыҙхандан Көньяҡ Уралда ҙур ерҙе биләр өсөн ярлыҡ ала (Мөйтән бей олоҫо); Шаҡмаҡлы бей (XIII б. 30-сы йылдар); Бүҙкә (Бүрәкә)-бей (40-50 йй. XIII б.); Йөрүкә (Һеркә) бей (50-60 йй. XIII б.); Мангыт (50-60 йй. XIII б.); Уралбей (20-30 йй. XIV б.); Инсан бей (40-50 йй. XIV б.); Бөйәт бей(40-50 йй. XIV б.); Арбан бей (80-90 йй. XIV б.); Тумбай бей (80-90 йй. XIV б.), Тимер Ҡарабуға бей; Ҡарас бей (XV б.).; Һарыбаш бей (XV б.), Һарыш бей (XVI б.), Һарыбаш мырҙа (20-40 йй. XVI б.); Сурабан бей (40-50 йй. XVI б.), Иван Грозныйҙың аманаты булып Ҡаҙан ҡалаһында үлеп ҡала.

### Табындар

Табын ҡәбиләһенең кесе, кәлсер, йомран ырыуҙары Башҡорт иленә беҙҙең эраның 1-се меңйыллығы урталарында килеп төпләнә. Кесе табындар үҙҙәренең "иҫке йорто" итеп Нарыҫтауҙы иҫәпләй. Табын миграцияһының һуңғы этабы уларҙың Урал арьяғына күсеүе менән тамамлана.

Табындар һәм ҡатайҙар - Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында һәм Урал арьяғында барлыҡҡа килгән боронғо төрки ҡәбиләләр. Табындар Миәс, Яйыҡ, Уй, Тубыл, Һанар, Теча, шулай уҡ Агиҙелдең ҡушылдыҡтары буйындағы далаларҙы төйәк иткән.

Руденкоға ярашлы, табын ҡәбиләһе башҡорттар составында монголдарға тиклем үк булған. Ҡағанаттар осоронда табындар тәүҙә Ҡара Иртышҡа, аҙаҡ Етейылғаға йүнәлә. Ҡыпсаҡтар тулҡыны көнбайышҡа ҡуҙғалғас, табындарҙың бер өлөшө улар менән китә. Табындар риүәйәттәрендә уларҙың "Ырғыҙға" һәм "Үҙәнгә" килеп, "Волга аша сығыуҙары" хаҡында әйтелә. Башҡорт шәжәрәһендә Түмәндең Майҡы бейҙең улы булыуы хаҡында әйтелә. Түмән VI быуатта боронғо төрки дәүләтә нигеҙ һала һәм был дәүләттең үҫеше өсөн ҙур йоғонто яһай. Кесе, кәлсер, йомран ырыуҙары беҙҙең эраның 1-се меңйыллығының 2-се яртыһында көньяҡ Уралға күсә. Бөгөн кесе табындар Дим йылғаһы башында, Ыҡ йылғаһы буйында һәм Нарыҫтау тирәһендә йәшәй. Көнбайыш табындарҙың тарихын М. Өмөтбаев өйрәнгән.

Табындарҙың боронғо риүәйәттәре һәм легендалары уларҙың ата-бабаларының ватаны көнбайыш тарафы булыуы хаҡында һөйләй. Риүәйәттең мәғәнәһе шунда - легендар шәхес Майҡы бей Сыңғыҙхандың яҡын дуҫы булып китә. "Сыңғыҙхан заманында Майҡы бей Урал тауҙарында йәшәп, Миәс йылғаһы буйында йәйләгән. Ул Сыңғыҙханға бүләктәр алып барған. Майҡы бей бөйөк хандың уйышны булып китә. Уға Уйшын Майҡы бей исеме бирелгән. Майҡы бейҙең бүләре Ҡаратабын бей табындар ырыуын башлаусы".

**(Дауамы бар).**

**✓ Теле булмаған милләт йөҙөн дә, рухын да юғалта. Рухы булмаған халыҡ менән идара итеүе күпкә еңелерәк. Рәсәйҙең көсө - күп милләтле һәм күп телле булыуында. Маңҡорттар үҙ тамырҙарын һәм ошо көстө инҡар итә.**



# БАШҠОРТ

## нығыраҡ








(Башы 1-се биттә).

**Башҡорт теле менән ҡыҙыҡһыныуыҡ һине артабан Башҡортостанға алып килде инде, шулаймы?**

- Мәктәпте тамамлап, Ырымбур педагогия университетының сит телдәр факультетының инглиз-француз бүлегенә уҡырға ингәйнем. Ул ваҡытта тәржемәсе булырға хыялллана инем. Ниндәйҙер кимәлдә фән өлкәһендә лә эш алып барылды. Шунан Википедияның хакимы (администраторы) булып киттем. Тап шул мәлдә минең турала ишетеп, Башҡортостан юлдаш телеканалы журналистары Ырымбурға, беҙҙең университетҡа килде һәм мин тәүге тапҡыр башҡорт телендә интервью бирҙем. Шул осорҙа балалар яҙыусыһы Гүзәл апай Ситдиҡова менән таныштым. Минең башҡорт теле менән ныҡлап ҡыҙыҡһынып китеүемдә уның йоғонтоһо ла тос булғандыр, тип уйлайым.

2012 йылдың ҡышында БСТ каналы тарафынан уҙғарылған "Башҡорт теле көнө"нә Өфөгә килдем, "Телеүҙәк" тапшырыуында сығыш яһаным. БСТ-ла бик ҡыҙыҡлы кешеләр менән таныштым. Тапшырыуҙан һуң М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситова мине студенттары менән осрашыуға саҡырҙы. Студенттар алдында сығыш яһағандан һуң, ғилми ойошмаға инеп сыҡтым (ул ваҡытта факультет кимәлендәге фән эштәре менән Лидия Фәтих ҡыҙы Әбүбәкерова шөғөлләнә ине) һәм, шул тиклем әүҙем, тырыш егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы күреп, Ырымбур педагогия университетынан БДПУ-ға уҡырға күсергә ҡарар иттем. Тәүҙә башҡорт-инглиз бүлеген һайларға уйлағайным, шунан кире уйланым: инглиз теле белгесен һәр ерҙә лә табырға була. Шуға, башҡорт-ғәрәп бүлегенә уҡырға индем. Өҫтәүенә, мине 2-се курстан тура 4-се курсҡа ҡабул итеүҙәре лә ҡыуандырҙы...

**Яратмайынса, телде өйрәнеп булмайҙыр. Ғөмүмән, башҡорт теле, башҡорт мәҙәниәте тураһындағы фекерҙәрең менән дә уртаҡлаш әле...**

-Эйе, яратмайынса, телде өйрәнеп булмай. Башҡорт теле менән Гёте, Толстой, Маргарет Раш юҡҡа ғына ҡыҙыҡһынмаған бит. Башҡорт халҡы беҙҙең төбәктә, Мәхмүт Ҡашғари иҫбатлағанса, IX быуаттан бирле билдәле. Һәм ул ваҡыттан алып бөгөнгә тиклем был халыҡ башҡорт булып йәшәй, башҡорт телендә һөйләшә, башҡорт мәҙәниәтен ҡулынан килгәнсә һаҡлай. Башҡорттоң ошо тарихы миндә һәр ваҡыт һоҡланыу уята.

Башҡортостанда, үҙ тыуған республикаларында туған телдәрендә аралашмаған башҡорттар бар. Ҡыҙыҡ та, ҡызғаныс та хәл. Кешенең туған телен белмәүе ғәжәп күренеш. Сөнки телен оноҡҡан кеше милләттең юҡҡа сығыуына булышлыҡ итә. Бик толерант кеше булһам да, туған телен белмәгән кешеләрҙә аңлай алмайым. Туған телдән алыҫлашыу совет осоронан килә, тип уйлайым. Шул осорҙа милли телдәр грамматикаларын урыҫлаштырыу барған бит. Шуға ла бөгөн ике башҡорт бер-береһе менән туған телендә аралашһа ла, һөйләшенең ҡайһы ерендә хата ебәргәнен, ҡайһы урында дөрөҫ икәнен әйтә алмай. Урыҫ теленән ингән һүҙҙәр телмәрҙә йыш ҡулланыла. Икенсе телдән һүҙҙәрҙе күпләп индереү телдәрҙе тамырынан алыҫайтып, уларҙы бөтөрөү өсөн совет идеологияһы тарафынан ниәтләгән эш булғандыр, тип уйлайым. Сөнки теле булмаған милләт йөҙөн дә, рухын да юғалта. Рухы булмаған халыҡ менән идара итеүе күпкә еңелерәк.

Йәш быуындың туған телен өйрәнергә атлығып тормауының тағы бер сәбәбе - уларҙың урыҫтарға оҡшарға тырышыуы. Ҡалала үҫкән, йә булмаһа, ауылдан ҡала еренә күсеп килгән йәштәр үҙҙәрен урыҫ итеп хис итә башлай һәм телен дә, мәҙәниәтен дә юғалта. Ни өсөндәр, был кешеләргә урыҫ булып китеү ҙур ғорурлыҡ тойола. Ысынбарлыкта, улар бер ҡасан да урыҫ булып китмәй. Шулай итеп, маңҡортҡа әйләнәләр ҙә инде. Урыҫ кеүек булам, тип, милләтен, тимәк, йөҙҙәрен юғалта ундайҙар. Рәсәйҙең көсө - күп милләтле һәм күп телле булыуында. Маңҡорттар үҙ тамырҙарын һәм ошо көстө инҡар итә. Ҡыҙғаныс, бик ҡыҙғаныс.

Бер егет мәсеткә килеп инә лә, муллаға "Возьми, мулла, саҙаҡа!" ти. Мулла: "Саҙаҡа биргәндә русса һөйләшмәйҙәр. Сәпсим башҡортса әйтһәң, вәпши яҡшы булыр ине", - ти. "Һуң "сәпсим" тигәнең дә русса бит", - тип ҡырт киҫә егет. "Алай ғына нисауа, былай ғына можно", - тип яуаплай мулла. Әлеге ваҡытта башҡорт телендә аралашыусыларҙың телмәре ошо кәләмәсте хәтерләтә. Бәлки, башҡорттар быға иғтибар итмәйҙер ҙә, ләкин мин, икенсе милләт вәкиле булғас, был күренеште тиҙ шәйләп ҡалдым. Ниндәй генә телдә аралашһам да, башҡа тел һүҙҙәрен ҡушмаҫҡа тырышам. Телмәрҙә туған телдән һүҙҙәр әҙ ҡулланылыуы мине ныҡ борсой. Был күренеш башҡорттарға ғына түгел, ә урыҫ булмаған бөтә Рәсәй милләттәренә лә хас. Телгә күп урыҫ кәлимәләрен индереү туған телдәге телмәрҙә ҡулланылған һүҙҙәрҙе ныҡ сиклә. Һөҙөмтәлә күп һүҙҙәр юғала, онотола, иң яҡшы осраҡта, айырым һөнәр эйәләре телмәрендә генә тороп ҡала.

**Өфөлә саҡта һине рустар менән дә башҡортса һөйләшә, тиҙәр...**

- Эйе, минең шундай гәҙәтем бар - мин Өфөлә русса һөйләшмәҫкә тырышам. Ошоға бәйле сәйер генә хәлдәр ҙә булғылай ул. Былтыр Миңһылыу апай Усманова менән Польшаға барғайныҡ. Өфөнән поезға ултырырға булдыҡ. Электрон билеттарҙы алдан алған булһам да, урындарыбыҙ төрлө булғас, вокзалда, поезыбыҙҙы көтөп ултырған арала, касса янына барырға булдым. Спикерфонға яҡынлыраҡ килеп, кассала ултырған ҡыҙға башҡортса өндәштем: "Беҙҙең билеттарҙы йәнәш урынлашҡан башҡа урындарға алыштырып булмаҫмы икән?" - тим. Кассир ҡыҙ, тауышында ризаһыҙлыҡ һыҙаттары сығарып: "Я, к сожалению, не понимаю по-татарски", - тип яуап бирҙе. Тимер юл вокзалында кемдәр генә булып китмәй, улар араһында төпкөл ауылдарҙан йә сит илдәрҙән килгән русса белмәгән кешеләр ҙә булыуы мөмкин. Тимәк, тимер юл вокзалы кассаһында эшләүсе хеҙмәткәр кәмендә ике телдә аралашырға тейеш. Татар һәм башҡорт телдәрен дә айыра белмәйенсә, ул нисек клиенттар, пассажирҙар менән эшләргә тейеш һуң?..

**Сит телдәрҙе өйрәнеү буйынса үҙ методикаң бармы? Күбеһен үҙаллы өйрәнәһең шикелле...**

- Эйе, сит телдәрҙе башлыса үҙаллы, үҙ иркем менән өйрәнәм. Ваҡытты тигеҙ бүлгәндә, быныҡ бер ниндәй ҡыйынлығы ла юҡ, тырышлыҡ ҡына кәрәк. Телдең төҙөлөү системаһына төшөнөп алғас, эштәр бөтөнләй еңеләйә. БДПУ-ла уҡығанда, әлбиттә, ғәрәп телен уҡытыусы ярҙамында үҙләштерҙем. Бик ауыр тел, тиһәләр ҙә, миңә уны өйрәнеү ҡыйын бирелде тип әйтмәҫ инем. Әммә мин, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ғәрәп телен өйрәнгәндә бик үк әүҙем булманым. Әлбиттә, ғәрәп теленең грамматикаһын мин юғары кимәлдә үҙләштерҙем, тип иҫәпләйем. Шулай ҙа, әңгәмәләшкәндә, ҡайһы бер һүҙҙәр менән ауырлыҡтар тыуғылай. Минең уйымса, барыбер грамматикаға төп иғтибарҙы йүнәлтеп, дөрөҫ эшләгәнмендер. Сөнки телдең иң мөһим механизмы, өләшө - грамматика. Һүҙҙе белмәгәндә лә, грамматиканы, һөйләм төҙөлөшөн белһәң, контекстан алып, һүҙҙең башҡа формаларын һүҙлектән табырға була. Нисек кенә булмаһын, ғәрәп телен урта дәрәжәлә беләм, тип әйтеп була. Польшала ғәрәптәр менән аралашҡаным бар. Ғәрәптәрҙең кемеһелер телмәренә инглиз, кемеһелер француз һүҙҙәрен ҡушып һөйләшә. Шул бер үк "сир" инде.

Поляк телен шулай уҡ һәйбәт беләм. Башҡорт телен үҙегеҙ баһалағыҙ. Украин, рус, белорус, инглиз телдәрен белеүем дә ошо кимәлдә. Немецтар миңә, беҙҙең телде юғары дәрәжәлә беләһең, тип әйтә.

**Һин БДПУ-ны тамамлаһың, әле Польшала уҡыйһың. Был ҡарарға нисек килдең?**

- Аллаға шөкөр, БДПУ-ны ҡыҙыл дипломға тамамланым. Ғәрәп теленән дә "5"-ле алырға насип булды, әлхәмдүлиллаһ. Польшаға барырға тигән планым элек тә була торғайны. Поляк теле менән Ырымбурҙа уҡ шөғөлләнә инем. Мәктәптә һәм Ырымбур педагогия университетында уҡыған сағымда (8-се синыфтан) Ырымбурҙағы поляктарға 4 йыл буйы поляк теленән белем бирергә насип булды. Шуны һәм диктант һөҙөмтәләрен иҫәпкә алып, Өфөләге поляк йәмғиәте миңә Польшала studia doktoranckie тип аталған дәрәжәгә уҡырға барырға мөмкин, тип хәбәр итте. Унда фән кандидаты тигән дәрәжә бөтөнләй юҡ. Докторантура ғына бар. Польшала уҡыу мөмкинлеге барлығын ишетеп, бик ҡыҙығып, ҡыуанып киттем. Сөнки Рәсәйҙә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡурмәгәндәр йә бөтөнләй күрмәгәндәр өсөн шарттар әлегә тыуҙырылмаған. Һәр хәлдә, был йәһәттән хатта Польша кимәленә лә етмәгәнбеҙ.

**Әйткәндәй, Вячеслав, һине ҡара күҙлектә һәм таяҡ тотҡан килеш күреп, бөгөн аптырап ҡалдыҡ. Ниҙәр булып китте?**

- Мин һәр ваҡыт донъяны яртылаш ҡына күрә инем. Йәғни, атлап барғанда юлды күрмәй торғайным. Шуға, диуарға йә кешегә тотоноп йөрөргә тура килде. Дөрөҫөн әйткәндә, мин бала саҡтан уҡ яҡшылап күрмәйем. Был минең өсөн ғәҙәти хәл. Тимәк, мине йәлләргә лә, миңә аптырарға ла кәрәкмәй. Быға тиклем коррекциялы күҙлек кейә торғайным. Хәҙер ул күҙлек миңә ярҙам итмәй. Бар ғиллә - күреү һәләтенең үҙендә түгел,

✓ *Ә башҡорт теле, урыҫты һанамағанда, Рәсәйҙә һаны буйынса өсөнсө урында килгән милләт теле. Шуға күрә, башҡорттар, һеҙ үҙегеҙ әүҙемерәк булырға тейешһегеҙ. Беренсенән, ғаиләлә дәүләт теленә әйләнһен ул туған телегеҙ.*



# ТЕЛЕНӘ...

## тартылам



ә күреү ҡырында (поле зрения) булғанын 20 йәшемә тиклем аңлап етмәнем. Күреү ҡыры насарайыуҙың үҙенсәлеге шунда: 100 процентлы күреү һәләтең булһа ла, күреү ҡырының сикләнгәнлеге һинән күрмәгән кеше яһай ала. Әңгәмәсемдең ҡайҙа ултырыуы тауышынан һәм төҫмөрөнән аңлашыла. Төҫ айыра алам. Ә йөҙ һыҙаттары - күренмәй. Шулай ҙа интенсив яҡтылыҡ миңә һаман да ҡамасаулай. Шуға, ҡара күҙлек менән йөрөйөм.

Польшаға барыу минең өсөн бик яҡшы булды. Беренсенән, унда күрмәгән йәки күреү һәләте түбән булған кешеләр өсөн бөтөн шарттар ҙа тыуҙырылған. Мәктәптәрҙә балаларға күрмәгән кешеләр, ишетмәгән кешеләр ниндәйерәк була, уларға нисек өндәшергә кәрәк һәм нисек өндәшергә ярамай - барыһын да яҡшылап өйрәтәләр. Метро станцияһынан сыҡҡанда мин күрмәгәндәр өсөн махсус юл буйлап барам. Бер көн ҡаршыма бер төркөм балалалар осраны. Бер ҡыҙыҡай бөтөн төркөмдө туҡтатып: "Һаҡ булығыҙ, күренмәгән кеше", - тине. Ҡыҙсыҡтың "күрмәгән" менән "күренмәгән" тигән һүҙҙәрҙе бутауы яҙыҡ түгел, ә иптәштәрен иҫкәртә белеүе Рәсәй кешеләрен аптыратырлыҡ.

Әйткәндәй, 2 йыл Польшала йәшәүемдән һуң минең башҡорт телем боҙолмағанмы?

**Юҡ, боҙолмаған. Күрәһең, унда башҡортса аралашыр кешеләр барҙыр?**

- Варшава университетында Шәрҡиәт факультетында Төркиәт һәм Урта Азия халыҡтары кафедралары бар. Факультетта башҡорттар булмаһа ла, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ студенттары етерлек. Улар менән башҡортса ла, уларҙың телендә лә аралашам. Шулай ҙа башҡортса һөйләшеүҙе бик һағынып китһәм, мин һәр ваҡыт БДПУ-ға мөрәжәғәт итәм дә, студенттарға ситтән тороп видео-бәйләнеш ярҙамында дәрес үткәрәм. Бер тапҡыр скайп аша тура бәйләнеш режимында дәрес үткәреүемде һорап, БДУ-ның Сибай институты ла мөрәжәғәт итте.

**Әле һин Польшала оҙаҡ тотҡарланырға уйлайһыңмы?**

**Ҡасанға тиклем уҡымаҡсыһың?**

- Уҡыуҙы, Алла бойорһа, быйыл тамамламаҡсымын. Артабан ни булырын белмәйем әлегә. Сөнки Польшала башҡорт үҙәге булдырырға тигән хыял менән янып йөрөйөм әле. Тик быным өсөн Башҡортостандан да матди ярҙам булырға тейеш, тиҙәр. Мин Польшала йә башҡорт үҙәге асырға, йә булмаһа, студенттарға башҡорт теленән дәрестәр бирергә теләйем. Икенсе төрки теле итеп булһа ла башҡорт теле уҡытылырға тейеш, тип иҫәпләйем. Беҙҙең Төркиәт кафедраһында төрөктәр менән әзербайжандар күп кенә, был телдәр уҡытыу программаһына ла индерелгән. Мин уҡытыу программаһына башҡорт телен дә индереү тәҡдиме менән сығыш яһаным. Польшала төрки халыҡтары үҙәктәре күп кенә. Познандә ҡаҙаҡтар (Һенрик Янковски тигән ағай полякса ҡаҙаҡ теле грамматикаһын яҙған) күп. Минең ғилми етәксем Ежи Тулисов та шулай уҡ поляк кешеһе, тамырҙары, белеүемсә, Тын буйҙарынан, нуғайҙарҙан. Краковта, беләһегеҙме, кемдәр күп? Яҡуттар. Унда яҡут теле уҡытыла. Шулай булғас, ниңә поляктарға, башҡа милләттәргә беҙҙең башҡорт телен дә уҡытмаҫҡа?

Польшалағы белем биреү системаһы беҙҙеке менән сағыштырғанда бер аҙ айырыла. Әйтәйек, Польшаның бер мәктәбендә бер төркөм башҡорт балалары уҡый, ти. Ул төркөм, беҙ башҡорт телен өйрәнергә теләйбеҙ, тигән ғариза яҙа икән, ысынлап та уларҙың теләген ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеген, шарттарын булдырыу тураһында хәстәрлек күрелә. Башҡортостан менән бәйләнешкә инелә, уҡытыусы, һүҙлектәр, дәреслектәр мәсьәләләре тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. Украин, белорус, кашуб һымаҡ урындағы аҫаба телдәрҙе шулай бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ уҡытҡандарын ишетеп беләм. Ғөмүмән, берәй башҡорт теле белгесе, уҡытыусыһы сит илгә барып эшләп ҡайтырға уйлай икән, барған ерендә һис икеләнмәй ошо эште ойошторорға йөрьәт итә, йәғни башҡорт теле дәрестәре ойоштора ала. Сит илдәрҙә был йәһәттән сикләү юҡ икәнен яҡшы беләм.

**Вячеслав, һинең өсөн нимә ул илһөйәрлек?**

- Илһөйәрлек, минеңсә, тыуған төбәккә ҡарата әйтеләләр. Минең өсөн тыуған төбәк - киңерәк планда. Унда Ырымбурҙы ла, Башҡортосанды ла индерергә була. Ни генә булһа ла, тыуған яғыма ҡарата илһөйәрлек бар йөрәктә. Ғөмүмән, минең илһөйәрлегем киң төшөнсә ул. Рәсәй халыҡтары телдәре бик күп төрлө. Мин башҡорт теленә нығыраҡ тартылам. Был да илһөйәрлектең бер өлгөһө түгелме икән?

Әйткәндәй, тел сәйәсәтенә ҡарата минең үҙемдең фекерем бар, кем килешмәй - шул килешмәй инде. Туған телдәрҙе уҡытыуҙы мәктәптәге төп дәрестәрҙән ситкә сығарырға ярамай. Әгәр ҙә беҙ бөгөн, мәҫәлән, башҡорт телен, факультативтарҙа ғына уҡытабыҙ, мәктәптә уҡытыуҙы бер генә сәғәткә ҡалдырабыҙ икән, уны чукча теле хәленә ҡалдырабыҙ. Чукча теленен бер ҡасан да дәүләт теле булғаны юҡ - ул төбәк теле генә. Унда республика түгел - аймаҡ. Ана шул аймаҡ эсендә үҙҙәренең телендә һөйләшәләр ҙә инде чукчалар. Ә башҡорт теле, урыҫты һанамағанда, Рәсәйҙә һаны буйынса өсөнсө урында килгән милләт теле. Уны чукча хәленә тиңләргә һис ярамай. Шуға күрә, башҡорттар, һеҙ үҙегеҙ әүҙемерәк булырға тейешһегеҙ. Беренсенән, ғаиләлә дәүләт теленә әйләнһен ул туған телегеҙ. Унан һуң инде, закондарға таянып, уны дәүләт теле булараҡ бар ерҙә ғәмәлгә ашырыу сараларын күреү кәрәк. Шул уҡ ваҡытта башҡортса аралаша алған клубтар, башҡа урындар күберәк булһын ине. Бигерәк тә Өфөлә. Башҡорт аштары менән һыйлай торған кафе һаман да хыялда ғына. Башҡорт үҙенең ни тиклем ҡабатланмаҫ икәнен, ни тиклем әҙәпле икәнен башҡаларға күрһәтә белергә тейеш.

**Әле һин Башҡортостан юлдаш телеканалында "Башҡорт телен өйрәнәм" программаһының сираттағы дәрестәрен төшөрөүҙә ҡатнаштың, шулаймы?**

- Эйе, сираттағы тапшырыуҙарҙы төшөрөп бөттөк инде. Алдағы дәрес теҙмәһе менән сағыштырғанда, беҙ был төркөм менән телде тиҙерәк үҙләштерҙек. Бәлки, мин үҙем дә был йәһәттән тәжрибәлерәк булып киткәнмендер. Ғөмүмән, ике телле, күп телле кешеләр күберәк булһын өсөн ошо дәрестәр аша башҡорт телен өйрәтеү - бик яҡшы алым, тип уйлайым. Башҡортостан күп телле төбәк, шуға ла башҡорт телен барыһы ла камил белмәгәндә лә, уны бер аҙ аңларға тырышыу насар түгел. Һәр хәлдә, кемдер минән урыҫса: "Молодой человек, как пройти на улицу Заки Валиди?" - тип һораһа, мин: "Әфәнде, бына ошонан уң яҡҡа, шунан юл аша сығығыҙ ҙа, тура бараһығыҙ", - тиһәм, ул: "Спасибо!" - тип әйтһә, минең өсөн иң яҡшы хәл - шул. Тик башҡортса һөйләшеү ҙә етмәй, тик урыҫса һөйләшеү ҙә аҙ. Аҡмулла әйтмешләй, "Французса ла белеү яҡшы".

**Бөгөн мәктәптәрҙәге туған телдәрҙе уҡытыу менән бәйле ҡайһы бер сетерекле хәлдәргә ҡарата ни әйтерһең?**

- Рәсәй күп милләтле һәм күп конфессиялы дәүләт. Милли телдәрҙе, милли республикаларҙы бөтөрөргә саҡырыусыларҙы дәүләтте бөтөрөргә тырышыусылар, тип ҡарарға кәрәк. Ни тиһәң дә, глобалләштерелгән дәүләт менән идара итеүе еңелерәк. Ләкин Рәсәй өсөн был үлемесле. Беҙҙең дәүләт нигеҙен күп милләттәр билдәләй. Нигеҙҙе, билдәле булыуынса, емермәйҙәр, юҡһа, бина емерелеп төшә.

Беҙ бер ғаиләлә йәшәйбеҙ. Ғаиләлә бөтә балалар ҙа тиң хоҡуҡлы. Хоҡуғы күберәк булған, йә, киреһенсә, әҙерәк булған бала булмай. Дәүләттә лә шундай уҡ хәл. Рәсәйҙәге милләттәр быуаттар буйы хәҙерге Рәсәй дәүләте сиктәрендә йәшәгән аҫаба халыҡтар. Шуға күрә, илебеҙҙә төп халыҡ, эйәрсән халыҡ, беренсе халыҡ, икенсе халыҡ, тигән төшөнсәләрҙе ҡулланыу бөтөнләй урынһыҙ. Кесе, аҙ һанлы, тип йөрөтөлгән халыҡтарҙың да хоҡуҡтары Конституцияла нығытылған. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әле булһа ла күпселек, бигерәк тә юғары вазифаларҙы биләүсе сәйәсмәндәр, империалистик андан ҡотола алмай. СССР осоронда ла ошо аң халыҡҡа һеңдерелгән. Мәҫәлән, совет заманында, башҡорттар, осетиндар кеүек урыҫ булмаған башҡа милләттәр хаҡында "Дикие народы цивилизованной России" тигән ҡараш көслө булған. Был бик ҡыҙғаныс хәл. Һәм был ҡараштың бөгөн дә йәшәүе икеләтә үкенесле.

Һуңғы ваҡытта, эйе, ишеттем, туған телдәрҙе уҡытыу мөһимлеге шик аҫтына ҡуйылды. Милләтем урыҫ булһа ла, мин үрҙә әйтелгән инициативалар менән һис килешмәйем. Был инициативаларҙың файҙаһы юҡ, улар күп милләтле һәм күп динле Рәсәйгә зыян ғына килтерәләр, тип һанайым. Сәйәсмәндәрҙең, илдә етди, хәл ителеүен көтөп ятҡан мәсьәләләр ғәйәт күп була тороп та, сәйәси мәрәйҙәр яулар өсөн милли теманы күтәреүе насар күренеш. Улар күп милләтле Рәсәйҙең киләсәген хәстәрләргә тейеш, бурыстары - ысынбарлыҡтағы проблемаларҙы хәл итеү, ә үҙҙәренә арзан дан ҡаҙаныу түгел.

Башҡорттар бай тарихлы халыҡ. Башҡорт телен өйрәнгәндә уның логик тел булыуына төшөндөм. Шуға күрә лә башҡорт телен һаҡлау һәр башҡорттоң, башҡорт телен белеүсенең, башҡорт ерендә йәшәүсенең, йәғни беҙҙең изге бурысыбыҙ. Үҙенең ошо милләткә ҡыҫылышы бар икәнен аңлаған һәр кеше был эштән ситтә тороп ҡалмаҫҡа тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Вячеслав Чернев беҙгә, башҡорт телен туған теле итеп һанаған кешеләргә, күп йәһәттән өлгө була алырҙай кеше булып сыҡты. Әңгәмәбеҙ ваҡытында һәр һүҙҙе башҡортса әйтергә тырышыуы хайран ҡалдырҙы. Беҙ бит фекеребеҙҙе тиҙерәк әйтеп бирер өсөн телмәребеҙгә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырырға күп һорап тормайбыҙ. Һөҙөмтәлә телебеҙ ни башҡортса, ни урыҫса булмай. Ә Вячеслав Чернев һәр һүҙен, һөйләмен уйлап әйтә, урыҫ һүҙҙәрен ҡатыштырмай һөйләй. Үкенескә күрә, Черневтың һүҙҙәре менән килешмәй булмай. "Туған телгә ҙур зыянды сит факторҙарҙан да бигерәк, ошо телдә һөйләшергә тейешле кешеләрҙең битарафлығы, ялҡаулығы килтерә. Уйларға тырышыр урынға телмәребеҙгә тиҙ генә урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып ебәреү телде яйлап үлтерә", - ти ул. Урыҫ егетенең әле һөйләгәндәре һәр башҡорт "баҡсаһына" таш ата, уйланайыҡ, йәмәғәт.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

**✓ Уландарымдыҡы ла, тип ул шаштырыңҡырап ебәрҙе, әллә ҡайта торған улы, әллә юҡ. Ә ниңә, улы ҡайтмаһа, ейәндәре бар. Бер түгел, өсәү, иншалла. Нигеҙҙе уны ҡоротмай һаҡлау мотлаҡ.**






* * *

Эскәмйәлә гүйә энә өҫтөндә ултырған Сәләх ҡарт менән ҡарсығының күҙҙәре ауыл осонда. Бына-бына улар көткән затлы машина ла күренер. Һис шикһеҙ. Бер аҙҙан балаларын эйәрткән Фуат менән килендәре күренде, уларҙың артынса машинала ҡыҙҙары менән кейәүҙәре килеп туҡтаны. Ә Тәүфиҡ, атайҙың ғорурлығы ла, хәсрәте лә булған Тәүфиғы, һаман юҡ. Ваҡыт үтеп: "Клуб янына йыйылырға!" - тигән саҡырыу-фарман яңғырап китеүгә Сәләхтең былай ҙа өлпөлдәп торған йөрәге жыу итеп ҡалып, күңеленә шомло һалҡынлыҡ йүгереүҙән эсе бошоп китте: нүжәле килмәҫ? Наһырҙы китәрҙе бит был йән язаһы малай. Ошо урында атай кеше, һөйөнөс һыҙаты үтеп, ҡарала көйгән көйөнөс тулҡыны етеп килеүен тойҙо. Бар булмышы менән һиҙҙе.

Эркелешкән халыҡ төркөмө ауылды урап йөрөп сыҡҡандан һуң сараның төп өлөшө үтәсәк Һаҡмар туғайына йүнәлде. Сәләх тә, бойоҡ ҡына баҫып, улар артынан эйәрҙе. Иҫтә ҡалырлыҡ тантаналы ғәмәл ахырында һәр кем ҡунаҡтарын әйҙүкләп, үҙенсә ыҡсым ғына итеп әҙерләнгән төйәктәргә таралыша башланы. Сәхнәлә һәүәҫкәр артистар ғына ҡалды.

Күптән күрмәгән туған-тыумаса, ғәзиз яҡындар менән һөйләшеп ултырып, ҡай урында күҙ йәштәре сыҡҡансы бер көлөшөп, бер илашып, күңел шештәрен байтаҡ бушатып алғандан аҙаҡ кемдер көрәш майҙанына, икенселәре ат бәйгеһе ҡарарға тип, өсөнсөләре төрлө уйын-көлкөлә ҡатнашып ҡалырға ашыҡты. Байрамдың ғүмере ҡыҫҡа, өлгөрөп ҡалыу кәрәк. Парлашып, Һаҡмарҙың аулаҡ бөгөлдәренә тартылған бәхетлеләр ҙә күренде.

Оло ҡаҙандарҙа бишбармаҡ, сүлмәктәрҙә йыуаса бешә, танауҙарҙы ҡытыҡлап, тирә-яҡҡа тәмле еҫтәр тарала. Усаҡтар тирәһендә йөҙҙәре алһыуға мансылған килендәр өйөрөлөп-сөйөрөлә. Уларҙың элек күрер күҙгә күрекһеҙ гәүҙәләре лә бөгөн килеп ғәжәп һылыуланып киткән. Күмәк тауыш араһынан ҡәйнәләрҙең ҡәтғи фармандары айырым-асыҡ ишетелеп ҡала, һәр төрлө тәм-томға тейенеп кинәнгән бала-сағa сыр-сыу килә. Байрам ҡәҙимгесә дауам итә.

* * *

Сәләх ҡарттың ғына күңеле китек: ҡылау йәмһеҙләй башлаған күҙҙәрен талдырып, күпме көтһә лә, өлкән улы килмәне. Килә алманымы, теләге булманымы, кем белһен. Тыуған төйәгенә ҡайтып, танһыҡлап киткән тәбиғәт ҡосағында хозурлап, онота барған бала саҡ дуҫтарын, ауылдаштарын күреп, ниһайәт, ауылдың тормошо, көнитмеше менән танышып, ҡыуанып-шатланып китә алмау үкенес тойғолары уятмаймы икән унда? Шул ҡәҙәре таш бәғерлеме тәүфиҡһыҙ Тәүфиғы? Әллә килен?.. Юҡтыр, булмаҫ, ирмен тигән ир бисә һүҙенә төшөп тормаҫ, яңғыҙына ла ҡайтып китергә була...

- Нимәһенә балтаһы ҡумырыҡҡа төшкән кешеләй мөжәрәйеп киттең әле, ҡарт? - Толҡа тапмай ултырған Сәләх янына ҡырлап Нәҡиәһе килеп ҡунаҡланы, күрәһең, күңелен күтәрмәксе булды. - Ҡара, ниндәй шауҡымлы байрам.

- Белемең юғары, дәрәжәң ҙур булыу менәнме, ғәмең булмағас, - тип танау аҫтынан мөңгөрҙәне бабай, ҡайҙалыр ситкә ҡарап, - күңел өсөн ярты көнгә кендеген киҫкән атай йортона ҡайтып китер форсаты юҡ түгелдер бит инде.

Ҡарттың соғол йөҙөндә күләгә сағылып ҡалды, ошо мәл ул бына-бына илап ебәрергә торған сабыйҙы хәтерләтә ине.

- Аһ, Сәләхитдин, нимәһенә шул тиклем бөтөрөнәһең? Икенсе юлы ҡайтыр, Алла теләһә. - Ҡарсығы уны йыуатып маташты. - Кәм-хур булып, ғәм алдында йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәй генә йәшәгәстәре етмәгәнме? Кит юҡты.

- Етмәй! Эш унда ғына торһа икән. Тыуған ере бөтмәҫ һыҙланыу булып күңеленә инеп ултырмаған, күрәһең. Шәт, йүнле тәрбиә бирә алмағанмын. Бер нәмә лә аңламаған кешеләй ултыраһың шунда. Күҙҙәреңдең мантиғы юҡ, - Сәләх, үпкәләгәндәй, әбейенә арты менән боролдо.

- Мин аңлайым да ул...

Ошо мәл Сәләх ҡарт алдына бынан утыҙ биш-ҡырҡ йылдар элек әллә яҡты киләсәк, матур яҙмыш, тип, әллә һәлкәүлеге арҡаһында, бәлки, холҡона баш була алмай ауылдан сығып китеп, хәҙер инде күп йөрөгән ҡағыҙ аҡса ише нығ таушалған, ни аралалыр бер сама кәйефләнеп алырға өлгөргән Кәтип килеп баҫты. Иҫке пинжәк өҫтөнән, ергә һөйрәлтеп, самаһыҙ оҙон елән кейеп алған булған. Үҙенән биш йәшкә кесе Кәтипте Сәләх көскә таныны. Ҡайҙа булған элекке фартауай һын, күпереп торған бөҙрә сәстәр? Заманында үҙен әллә кемгә ҡуйып, биғәләшләнеп, кеше ыҙалатыуҙан йәм табып, ер өҫтөнә һыймағандай йөрөгән һауалы, былағай егет урынына пеләш башлы, көмөрәйә төшкәнлектән кәкре һаплы таяҡҡа таянған, балаҡтары торба ише салбарының төбө тубығына төшкән кәлтер ҡартлас тора. Бары күҙҙәре генә әүәлгесә мут йылмая. Сәләхтең башынан ҡапыл: "Минең дә ҡиәфәт ошолайыраҡмы икән?" - тигән бошонҡо уй үтеп китте.

- Һаумыһығыҙ, Сәләх ағай!

- Арыу әле. - Ағаһы, ҡустыһын сырамытҡанлығын белдереп, яҡты йөҙ күрһәтте. - Ә-ә, Кәтип ҡусты икән, танымай ҙа торамсы. Үҙгәргәнһең, нығ үҙгәргәнһең. Ултыр.

- Нужа үҙгәртә, ағай, нужа. Мин күргәнде күрһәгеҙ... - Кәтип, ярты һүҙҙә туҡтап, сырҡыратып күҙҙәренән йәш һығып сығарҙы. - Һеҙ генә ул бында, ауылда ятып, бер ауырлыҡ күрмәнегеҙ. Вапше!

- Бәрәкәт! Һине кем ҡыуып ебәрҙе һуң ауылдан? - Ошо, көтөлмәгән һүҙен уйламай ысҡындырған әҙәмгә хәтере ҡала биреп ҡуйған Сәләхтә әрнеүгә өҫтәп ытырғаныу тойғоһо уянды. - Башҡалар йәшәгәнде йәшәргә ине. Исмаһам, кеше алдында шәмәреп торма, көнө ул түгел.

- Һи-и, Сәләх ағай, һин бигерәк эреләнеп киткәнһең түгелме? Ялан аяҡ йөрөгән малай саҡтарҙа улай түгел инең. Хәйер, заманаһы ниндәй - кешеһе лә шулай инде...

- Бына быныһын раҫ әйттең, - һарыуы ҡайнай башлаған Сәләх урынынан ҡалҡына бирҙе, кире ултырҙы, кинәйә менән дауам итте. - Кешеһе бөгөн заманына торошло. Донъя, мәйтәм, ваҡ әҙәмдәр менән тулды...

- Әллә заманы кешеһенәме? - Кинәйәне аңламаған Кәтип йомшай биреп ауып төштө, Сәләхте ҡосаҡлап уҡ алды.

- Миңә ҡалһа, икеһе лә бер нәмә: заманды әҙәм тыуҙыра, ә әҙәмдең үҙен замана тәрбиәләй. Шәжәрәңде беләһеңме һуң, ҡустым? - тип фәлсәфә итте Сәләх.

- Суртымамы миңә шәжәрә? Шәжәрә түгел, яҡын зат-зәүер саҡҡа танып тора. Ауылды күреп китһәм, шул еткән, - Кәтип йәнә урынһыҙға ҡыҙа башланы.

- Бына быныһы насар. Тамырыңды онотоу ярамаған эш. Үткәнен белмәгәндең...

- Нимәһенә миңә аҡыл һатып ултыраһың әле, наҙан? Улым серегән бай тигәс тә, әллә... Хәлеңде хәлләргә лә ҡайтмаған бит әле.

- Уныһын ҡайҙан белдең? - Әлеге һүҙ Сәләхтең иң ауыртҡан еренә тейҙе.

- Хәбәрҙең уның, яҡшыһы ишетелмәһә лә, яманы тиҙ тарала. Әллә кем булып ҡыланма.

- Уйламайым да. - Былай ҙа талағы ташып торған Сәләхтең кәйефе бөтөнләй ҡырылды. Иҫереккә һүҙ ҡушһаң... - Бар, маҙамды ҡоротма, ана, үҙ ағай-энең янына, өҙөлөп көтәләрҙер затлы туғандарың.

- Өнәмәнеңме? Харап икән. Йығылғанды түпәләргә кем булдырмай... Көйләшеү килеп сыҡманы. Сәләх, секерәйә биреп, Кәтипте ҡыуып тигәндәй ебәрҙе. Уныһы ниҙер мыңғырлап, елән сабыуына урала-урала китеп барҙы. Сәләх уйға ҡалды: "Кешенең зитына тейергә элек тә шәп инең, һаман шул икәнһең, уафаһыҙ. Ә шулай ҙа ни өсөн үпкәләргә Кәтипкә? Теле көрмәлгән булыуға ҡарамаҫтан, ул бит йәшереп тормайынса, тураһын бәрҙереп, хаҡты әйтә. Өлкәне - атай ғорурлығы, шул ҡәҙәре ҙур кеше, килеп, унан хәл торошон һорашып, ҡәүем ҡаршыһына баҫтырып, йылы һүҙ әйтеп, ололап китергә форсат тапманы, имеш. Берәҙәк сәрхүштең сәрхүше күҙеңә төртөп кәмһетеп тора. Ғәрлек түгелме ошо? Ғәрлектең дә ниндәйе! Йүнле кешеләр киләсәген ҡайғыртып бала таба, ә былар... Ҡыутомшоҡтар!" - Сәләх, үҙе лә һиҙмәҫтән, күңеленән улы менән киленен әрләп ташланы.

...Байрам үтте. Уның иҫтәлеге булып Сәләх ҡарттың күңел төпкөләндә ғүмергә тағатылмаҫ төйөн тороп ҡалды. Килке-килке һулҡылдап, ул, туҡтау белмәй, йөрәкте өйкәп-өйкәй, һис ҡотолор әмәл юҡ.

Йәне шул ҡәҙәре көйөп, хәтере ҡалған Сәләх Тәүфиҡҡа тәғәйен өйҙө кисекмәҫтән һатып ебәрергә ҡарар итте: күҙ көйөгө булып етемһерәп тормаһын. Йәлкелеккә йәлке инде, күпме көс һалып, күпме тир түгелгән. Бер йүнле генә ҡулға эләкһә...

* * *

Ҡайһы яҡтандыр килгән һатып алыусы, ҡурсаҡ ише биҙәлгән өйгә оҙаҡ ҡына һынап ҡарап торғандан һуң, бошмаҫ ҡиәфәт менән:

- Ярай, второй сортҡа бара инде, - тип ҡуйҙы, - беҙгә уның стеналары булһа еткән, ҡый-ҡыпырын үҙеңә ташып алырһың. Ере менән һатаһыңмы, бабай?

Сәләх терт итеп ҡалды: тимәк, ошо әҙәм фекеренсә, ул матур итеп йорт төҙөмәгән, ә алама тауыҡ ише ҡый-ҡыпыр өйөп ҡуйған. Бына һиңә - мә!

- Нисек инде, ере менән? - Ҡапыл-ҡара ҡаушай төшкән хужа үҙен тиҙ ҡулға алды. - Ер, гаспадин, беҙҙә һатылмай. Ер ул Хоҙайҙыҡы.

Әлеге яуапҡа "гаспадин" ҡыуанып уҡ китте: осһоҙға төштө, йәнәһе, былай булғас. Ул ифрат ҡәнәғәт ҡалып:

- Эйе шул, ер һатып, ошоғаса кем йәнсегән, - тип ыңғайға һыпырған булды. Әммә Сәләх уны ошо урында шаңҡытты:

- Ер урынында ҡала, ә өйҙө боҙаһың да күсереп алаһың.

- Нисек? Мин бит бында дача ҡуймаҡсы инем.

- Алып ҡайт та үҙеңдә яһа дачаңды, ә бында рөхсәт юҡ. Низашто! Бында минең олатай нигеҙе, ҡомартҡы. Уландарымдыҡы ла...

Уландарымдыҡы ла, тип ул, әлбиттә, шаштырыңҡырап ебәрҙе, әллә ҡайта торған улы, әллә юҡ. Ә ниңә, улы ҡайтмаһа, ейәндәре бар. Бер түгел, өсәү, иншалла. Нигеҙҙе уны ҡоротмай һаҡлау мотлаҡ.

Икенсе көнөнә үк урам һелкетеп ғәләмәт дәү машина килеп туҡтаны, унан һаҡал-мыйыҡ баҫҡан биш-алты кеше төштө. Балта, лом, сөй һурғыстар менән ҡоралланған шөкәтһеҙ әҙәмдәр шунда уҡ эшкә тотондо. Әүәл береһе, ни сәбәптәндер, тик торған сыйырсыҡ ояһын тумырып ауҙарҙы. Уныһы гөрҫ итеп ҡура башына килеп төшөүгә лапаҫ аҫтындағы ҡарлуғас ояһы ҡуптарылып ергә осто, борсаҡтан саҡ ҡына эрерәк күкһел-сыбар йомортҡалар тирә-яҡҡа һибелде. Кәрәге тейһә, тип ҡулына балта тотоп килеп, ошоларҙы күреп торған Сәләх ҡарттың көтөлмәгән эштән йәне сыға яҙҙы. Ул сытырлатып күҙҙәрен йомдо. Йомдо ла йәһәт кенә кире асты.

- Нимә эшләйһегеҙ, уландар? - тип тегеләрҙең янына килеп етте. - Әҙәм рәүешле, ипләберәк ҡыланһағыҙ ни була.

- Тынyслан, абзый, нисек ҡыланһам да, ул сыпсыҡтарыңды үҙем менән алып китә алмайым бит инде. - Өфө яңы хужаһы, ғәләмәт оло ҡорһаҡлы, күҙлек кейгән, йәйен-

**✓ Һүҙ азатлығы - закон менән нығытылған! Барыһын да уртаға һалып, асыҡтан-асыҡ һөйләшә алабыҙ. Ә бөгөнгө хәлебеҙҙе ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында дөрөҫ күҙаллай алмайбыҙ икән, тимәк, йәмғиәттең дөйөм кимәле шундай.**

ке бәшмәк ише төпөш ир йораты, кәмһетергә теләгән һымаҡ, бабайҙың шау һөйәк яурынынан ҡаҡты. Шулай ҙа: - Егеттәр, абайыраҡ булығыҙ! - тип ҡысҡырыуҙы кәрәк тапты.

Абай булығыҙ, тиһә лә, егеттәр хужа һүҙен ҡолаҡтарына ла элмәне. Береһе килеп, әле буяу еҫе аңҡып торған көп таҡтаһын шаҡарып ебәреүгә, унаһы сарт итеп урталай ярылып сыҡты. Сәләх, йөрәгә сем итеп ҡалыуҙан, һиҫкәнеп китте. Ә инде икенсеһе, шағыр-шоғор килтереп, семәрле тәҙрә ҡапҡасын ҡуптара башлағас, ул артабан түҙеп тора алманы.

- Ыслушай, һин! Минең мөлкәттән көлмәккә була килдеңме әллә? - тип ажарланып, төпөшкә ябырылды. - Һағыраҡ ҡыланығыҙ тип торам түгелме?

- Нисек инде һинең мөлкәт, абзый? - Бүлтәй һауалы "бәшмәк" теш араһынан сертелдәтеп түкөрҙө. - Кисә һинеке ине, бөгөн минеке. Бәйәһе түләнгән, нисек теләйем, шулай ҡыланам, и баста. Так што, мешать итеп, аяҡ аҫтында буталып йөрөмә, йәме.

- Аһ, шулаймы! - Сәләх ҡарт, сәбәләнеп, ҡуйынынан төргәк килтереп сығарҙы ла ҡап ҡорһаҡтың алдына бырғатты. - Бына бысраҡ аҡсаң! Бына дағауырың! Ә хәҙер марш бынан! Ярандарыңды ал да.

- Һы, аҡсанан туйған да кеше була икән. - Теге көскә әйелеп, төргәкте ҡулына алды. - Нимә, әллә аҙһындеңме? Өҫтәйем...

- Әйткәнде ишетмәнеңме әллә, улым?

Төпөш, күрәһең, ҡарттың үҙенә ҡарағанда уның ҡулындағы балтаһынан шикләнә, ике күҙе шунда.

- Ҡарале, старикан әллә былайыраҡ инде. - Береһе сикә тирәһендә үҙенсәлекле ишара яһаны. - Аҡса күргәс, аҡылына зәғифлек килде, ахыры.

- Ә-ә, суртым белһен уны! - "Бәшмәк", әсенеп, ҡул һелтәне. - Тиктомалға енләнде лә киттесе. Күпме расходҡа һуға, мәғәнәһеҙ.

- Аңламаҫһың был ҡарттарҙы.

- Ана шул-шул, аңыңа барып етмәгәс, ҡәҙерен дә белмәйһең. - Сәләх шәбәйеп бартанданы. - Үҙегеҙ тәҙәмәгәс ни.

Балтаһын инбашына һалып, гәйрәтенә нығ ышанған көрәшсе һынында ҡаршы килгән дыуамал ҡарттан ҡурҡа төшкән төпөш сигә бирҙе:

- Оһо, во дает! Эй, мужики, сворачивайся! - тип оран һалды. Мужиктар аптырашып китте. - Старик отказной һуҡты. Алағайымға кеше ҡаңғырта, һантый.

* * *

Торбаһынан һаҫыҡ төтөн бөркөп ҡуҙғалып киткән машина, ауыл осона етеп, күҙҙән юғалғас, Сәләх ҡарт иркенләп тын алды. Боролоп, яраланған йөнлек ише йөнселеп бөткән улы өйөнә әрнеп ҡарап торҙо. Әүәл ул һибелеп яткан йомортҡаларҙы йыйып, ҡарлуғас ояһына һалды, ояны йәпләп, элекке урынына беркетеп ҡуйҙы. Яңы ҡолаға ҡағып, сыйырсыҡ ояһын күтәрҙе. Ошонан һуң кителгән күңеле бөтәйә төшкәндәй тойолдо. Ярай, сыйырсыҡ инде балаларын осороп өлгөргән, бына бәхет билдәһе итеп күҙ ҡараһылай ҡурсалаған ҡарлуғасы ҡоршалған ояға ҡабат килерме? Килде! Ана, сырҡ-сырҡ итеп баш осонан бер-ике кәйелеп үтте лә һыуына башлаған йомортҡалары өҫтөнә барып ултырҙы. Булды былай булғас!

Хәҙер инде Сәләх ҡарттың кәйефе бермә-бер күтәрелде. Ул оло еңеүҙән һуң ярлыҡауға йомартланып киткән түрәләй күренде. Ихласлап, өйҙөң йөнселгән урындарын рәтләргә тотондо. "Имандарын юйған мәрәүәтһеҙҙәр, шул арала күпме онтап ташлағандар, ә, - тип уйланды бабай эш араһында, шунан кинәт, һиҫкәнеп, турайып басты: - Үҙең һуң, үҙең! Анауы бисара ҡош ояларын селпәрәмә килтергән манҡорттан ҡай ерең артыҡ? Һин унан яманыраҡ та. Һин гәзиз баландың хәләл торлағын саҡ ватып-емереп ташламаның. Байрамға ҡайтмаған, имеш, бераү. Шул ҡәҙәре оло гәйепме ошо? Ҡайҙа һиндә ир намыҫы? Ҡайҙа бала хаҡы? Аһ, донъя, ниҙәр генә ҡыландырмайһың бәндәләрең менән! Асыуына баш була алмаған Сәләх тә ана гәмәлдәрҙең иң яманын, яҙыҡтарҙың иң ауырын ҡыла яҙҙы, ҡарт йүнһеҙ, атай нигеҙен ҡороторға маташты. Хата өҫтөнә хата яһап, үҙебеҙҙе үҙебеҙ бөлдөрәбеҙ, аҙаҡ ултырып илайбыҙ. Былай барһаҡ, мөртәтлеккә лә күп ҡалмаҫ. Ярай, ваҡытында аңлап ҡалып, әлеге хаталарҙы мәңгелдә төҙәтә торһаҡ. Ә өлгөрә алмай ҡалһаҡ?.."

Күп тә үтмәҫтән, Тәүфиҡтың өйө әүәлгесә ялтырап, туйға әҙерләнгән кәләш ише көләп тора ине.

Иртәгеһен Мәскәүҙән ус аяһындай ғына телеграмма килеп төштө. Унда: "Үпкәләмә, атай, һүҙемдә тора алманым, йәнә алдаҡсы булып сыҡтым. Һөйөнсө, малайыбыҙ тыуҙы! Йәрингә һабантуйға ҡайтырбыҙ. Тәүфиҡ", - тип яҙылғайны. Яҙғы ҡояш ише йылмайған атай күңелен шатлығы күкрәгенә һыйманы: "Ана бит, малайыбыҙ тыуҙы, тигән. Насармы ни, фани донъяға бер башҡорт өҫтәлгән! Ҡайтырбыҙ ҙа тип әйткән. Әйтеүен әйткәс, знамо ҡайтыр".

Түҙем генә үҙ сиратын көтөп торған һөйөнәс һыҙатының башы күренде түгелме? Күренде шул. Булһын әйҙә тормоштоң аҡ һыҙаты ла, ҡараһы ла, югиһә, йәшәйештең ҡыҙыҡы ҡалмаҫ. Шулай ҙа һыҙаттарҙың аҡтары сағыуыраҡ та, дауамлыраҡ та булһа ине...

(Аҙағы. Башы 37-се һанда).

## ӘҘИП ҺҮҘЕ

**Филология фәндәре докторы, профессор, шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Тимерйән улы КҮЗБӘКОВ менән бөгөнгө журналистикалағы ҡайһы бер сетерекле хәлдәр, бәхәсле мәсьәләләр тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ЙӘМҒИӘТЕБЕҘ НИНДӘЙ - МАТБУҒАТЫБЫҘ ШУНДАЙ



**➔ Фәнил Тимерйән улы, бөгөнгө заман күҙлегенән сығып ҡарағанда, кем ул журналист? Уның тәғәйенләнеше, роле, һөнәрҙең йөкмәткеһе бер аҙ тоноҡланып ҡалманымы?**

- Әлбиттә, журналистың төп бурысы һәр осорҙа ла бер - ваҡытында мәғлүмәт еткереү. Ләкин шуны күҙ унынан ысҡындырырға ярамай: һәр заман үҙенсәлекле. Һәр замандың үҙ бурысы. Тарихтан һабаҡ алып, ыңғай тәжрибәне бөгөнгә яраҡлаштырып, бер баҫҡан тырмаға ҡат-ҡат баҫмау ягын ҡайғыртыу етмәй бөгөн. Ил башында кемдәр тороуы, матбуғаттың мөмкинлектәрен аңлап, ҡуллана белеп эш итә алыу-алмауына ла күп нәмә бәйле. Юғары профессиональ кимәл өҫтөнә граждандыҡ позицияһы ла ныҡлы булған журналист етәкселек иткән даирәнең дә, йәмғиәттең дә талаптарын күҙ уңында тотасаҡ.

Бөгөн беҙ мәғлүмәт хәл иткес роль уйнаған заманда йәшәйбеҙ. Тимәк, матбуғат сараларының, был өлкәлә эшләүселәрҙең әһәмиәте әйтеп, аңлап бөтөргөһөҙ. Йәмғиәттең тулы ҡанлы тормошо өсөн ысынбарлыҡты нисек бар - шулай күҙаллау тәүшарт. Тап шуның өсөн тейешенсә үҫешкән йәмғиәт журналистан хәҡиҡәтҡә тап килгән мәғлүмәт талап итә лә. Һәм иң мөһиме: һүҙ азатлығы - закон менән нығытылған! Барыһын да уртаға һалып, асыҡтан-асыҡ һөйләшә, фекер алыша алабыҙ. Ә инде бөгөнгө хәлебеҙҙе ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында дөрөҫ күҙаллай алмайбыҙ икән, тимәк, йәмғиәттең дөйөм кимәле шундай. Йәғни шуны әйтмәксемен: йәмғиәтебеҙ ниндәй - матбуғатыбыҙ ҙа шундай беҙҙең. Аң кимәлебеҙ торошо, ниндәй ҡиммәттәргә өҫтөнлөк биреүебеҙ киң мәғлүмәт сараларының сифатына туранан-тура йоғонто яһай. Әйтәйек, үҫешкән йәмғиәт икән, ул тап бөгөнгө ысынбарлыҡҡа тап килгән мәғлүмәтте ваҡытында алғыһы килә. Сөнки ысынбарлыҡҡа тап килмәгән мәғлүмәт хата һығымталар яһауға этәрә, янылыш юлға төшөрөп ебәрә, йүнәлеште дөрөҫ билдәләргә ҡамасаулай, шул нигеҙҙә маҡсаттарға ла ирешә алмайһың, әлбиттә. Йәғни, журналист һәр осорҙа ла ана шул дөрөҫ мәғлүмәтте еткерә алыу-алмау менән осраша, бәрелешә. Ә еткерә алыу-алмауы, тағы ла ҡабатлап әйтергә мәжбүрбеҙ, йәмғиәттең кимәле менән бәйле. Әйтәйек, йәмғиәт журналисҡа, хәҡиҡәткә, ысынбарлыҡҡа тап килгән мәғлүмәт бир, тигән талап ҡуя ала икән, был бурысты үтәүсене үҙ ҡанаты аҫтына ла ала алһын! Хоҡуҡи яҡтан эшмәкәрлеге гарантияланған осраҡта ғына хәбәрсе һөҙөмтәле эшләйәсәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙ әле лә берҙе һөйләйбеҙ, икенсене эшләйбеҙ, өсөнсө төрлө килеп сыға...

**➔ Ә һөҙөмтәле эшләү өсөн журналистың ниндәй мөмкинлектәре бар һуң?**

- Граждандыҡ позицияһы булғанда, Матбуғат тураһындағы законға нигеҙләнеп, күп проблемаларҙы хәл итергә мөмкин. Иң мөһиме - заманға ярашлы фекерең булһын. Әйтәләр әйтеүен: йәнәһе, журналист ул - ябай хәбәр еткереүсе генә. Улай түгел шул. Ябай хәбәр генә еткереүсе булып сығыш яһай алмай журналист. Әгәр ҙә инде: "Мин ҡушылғанды эшләйем", - ти икән, һөнәри бурысын еренә еткереп үтәй алмай, тигән һүҙ. Әлбиттә, матбуғат һәр ваҡыт коллектив емеше. Бында күмәкләшеп эшләйһең. Коллективта хәбәрсе, бүлек мөдире, баш мөхәррир, унын урынбаҫары бар. Ил етәкселәре бар. Хәбәрсе былар ҙың бөтәһен дә иҫәпкә алып эшләргә мәжбүр. Бына ошондай идеалдан айыу булған шарттарҙа ла журналист үҙенең төп бурысын үтәй алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

Күренеүенсә, журналист етәкселек алдында ла, ябай халыҡ араһында ла "үҙ кеше" була алғанда ғына һөҙөмтәле эшләй аласаҡ. Ә был еңелдән түгел. Булған мөмкинлектәрҙе тейешенсә файҙалана алыу уның һөнәри кимәленә, ҡыйыулығына, инаныстарына бәйле.

Өҫтөнә яуаплылыҡ алыуҙан да шыртламаһын ул. Халыҡ исеменән сығыш яһауын һәр саҡ тойоп йөрөнә, дөйөм мәнфәғәтте ышанысы яҡлай аласаҡ. Үкенесле, әлбиттә, әммә мин, бөгөнгө мәғлүмәт саралары үҙ бурысын тейешенсә үтәй, тип әйтә алмайым. Мин бында дөйөм хәлебеҙҙе күҙ уңында тотам. Эйе, һәр йәһәттән дә өлгө булырлыҡ айырым хәбәрселәребеҙ бар ул. Чиновниктар араһында ла осрай мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙалана белеүселәр. Халыҡтың да алдыңғы вәкилдәре етерлек. Әммә дөйөм торош ҡәнәғәтләнерлек түгел. Сәбәптәрҙе асыҡлай башлаһаң, проблемаларҙың бер-береһенә тығыҙ бәйле булыуын аңлайһың. Был йәһәттән халыҡ мәҡәле иҫкә төшә: "Атта ла, тәртәлә лә бар". Мин хатта, дауам итеп, "кәртәлә лә" тип өҫтәр инем. Унан да гәйре дилбегә тотоусыны ла күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ. Эйе, тәртә лә серек булыуы ихтимал (йә ҡабалан-ҡарһалан әтмәлләнгән), бейә лә холҡһоҙ, ҡаршылыҡтар ҙа табылып ҡына тора... Әммә дилбегә тотҡанһың икән (йә малай ғына көйөнсә тотторғандар икән), ҡайҙа, нисек, ҡайһы юлдан барырыңды уйлап эш ит, яуаплылыҡ той!

**➔ Журналист - шул уҡ сәйәсмәнме?**

- Шулай тип тә әйтергә мөмкин. Бөйөк урыҫ шағиры А.С. Пушкинды беҙ, тәү сиратта, шағир булараҡ, йәғни, рухиәт менән эш итеүсе, ижадсы булараҡ беләбеҙ. Ләкин ул журналистика менән дә шөғөлләнә һәм журналистар тураһында: "Сословие журналистов есть рассадник людей государственных", - тип ысҡындыра. Йәғни, журналистика сәйәсәт менән туранан-тура бәйле. Әммә әйтелгәнгә бер ни тиклем асыҡлыҡ та индерергә кәрәк. Сөнки журналистика бик күп ҡырлы, күп яҡлы. Ул тормоштоң үҙе кеүек, кешелеккә ҡағылышлы бар нәмәне үҙ эсенә ала. Дөйөм алып ҡарағанда, журналистика сәйәсәтте бер нисек тә урап үтә алмай. Шуға ла, журналистар араһынан билдәле сәйәсмәндәр, депутаттар, хөкүмәт эшмәкәрҙәре, дәүләт кимәлендә эшләгәндәр сыға икән, быға ғәжәпләнһәһе түгел. Был журналистиканың сәйәсәт менән бәйлелегенән килә. Йәғни, был өлкә менән шөғөлләнгән кеше инде предметты ентекләп, төбө-тамырына төшөп белә. Шуның өсөн уның журналистиканы ҡалдырып тороп, сәйәсәт менән генә шөғөлләнә башлауы ла бик мөмкин.

(Дауамы 13-сө биттә).

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЛЕК ҺӘМ БӘХЕТ КӘНФИТТӘРЕ

■ Яндекс.Сәләмәтлек ҡушылмаһы һуңғы осорҙа әүҙем үҫешә. Хәҙер унда "Дарыуҙар" тигән бүлек өҫтәлгән, был бүлектә дарыуҙарҙың һүрәтләмәһе, хаҡы, хатта ҡайһы дарыуханала булыуы тураһында мәғлүмәт бар. Бөгөнгә көнгә Яндекс.Сәләмәтлек каталогында яҡынса 13 мең дарыу препараты, шулай уҡ сәләмәтлек һәм матурлыҡ өсөн тауарҙар тупланған. Закон тарафынан интернет аша тура дарыуҙар һатыу тыйылған, шуға ла сервис дарыу тураһында мәғлүмәт кенә бирә ала. Дарыуханалаҙағы дарыуҙы әлегә интернет аша ҡалдыртып ҡына була, уны барыбер ҙә үҙенә барып һатып алырға кәрәк. Әйткәндәй, чиновниктар дарыуҙарҙы интернет аша һатыуҙы законлаштырырға ниәтләй. Шулай ҙа был рецепт аша һатылған препараттарға ҡағылмаясаҡ.

■ Немец ғалимдары "йәшлек һәм бәхет" кәнфиттәре уйлап тапҡан. Мюнхендың ҡартлыҡ менән көрәшеү буйынса институты белгестәре был кәнфиттең составына ҡара шоколад, манго иҙмәһе, соя һөтө, кипкән емештәр ҡушҡан. Ғалимдарҙың фекеренсә, какао фенилэтиламинға һәм полифенолдарға бай, улар ҡан баҫымына ыңғай йоғонто яһай. Был химик берләшмәләр күҙәнәктәрҙе иреклe радикалдарҙан һаҡлай, тап улар организмдың ҡартайыуына килтерә лә инде. Полифенолдар шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙарға менопауза мәлен еңелерәк кисерергә булышлыҡ итә, ә ир-егеттәрҙә простата биҙе менән бәйле проблемалар булдырмай. Мангола энзимдар күп, улар матдәләр алышыныуҙы көсәйтә, шешеү процестарына юл ҡуймай. Кәнфит составындағы кипкән емештәр ашҡаҙан-эсәк тракты эшен көйләй.

■ Тасмания университеты ғалимдары билдәләүенсә, ҡәһүә эсеү теләге уяна икән, уны эсергә кәрәк, юғиһә был хәтергә насар йоғонто яһай. Бигерәк тә иртәнге ҡәһүәнең хәтергә йоғонтоһо ыңғай. Яңы тикшеренеүҙәрҙә ҡәһүәне даими эсеүсе 55 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың уртаса йәше 30 йәш булған. Эксперимент ҡатнашыусылар көн дауамында 1 сынаяҡ ҡәһүә эскән. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә тағы ла ҡәһүә эсеү теләге уянған, тик ҡатнашыусыларҙың яртыһына 1 сынаяҡтан күберәк эсемлек эсеү тыйылған. Һуңынан уларҙың барыһы ла тест һорауҙарына яуап биргән. Ҡәһүә эсеү теләге менән янғандар һорауҙарға насарыраҡ яуап бирә, сөнки яңы мәғлүмәтте насарыраҡ ҡабул иткән.

■ Башланғыс кластарҙы тамамлап, урта мәктәпкә күскән балаларҙың психикаһында уҡыу йылының тәүге яртыһында тайпылыштар күҙәтелә. Әммә үҙен әүҙем тотҡан, кластан тыш саралаҙа ҡатнашҡан уҡыусылар был үҙгәреште еңел кисерә, ти Суссекс университеты ғалимдары. Улар 10 йәштән 13 йәшкә тиклемге 484 баланы тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Бындай балалар тиҫтерҙәре менән дә күберәк аралаша, үҙбаһаһы ла юғары, үҙҙәренә ышаныуҙары ла тейешле кимәлдә. Спорт менән шөғөлләнеүселәр ҙә ошонлай уҡ юғары баһаға лайыҡ булған.

■ Суонси университеты ғалимдары ҡайһы бер кешеләрҙә интернеттан сыҡҡас та ҡан баҫымы күтәрелеп, йөрәк тибеше көсәйеүен теркәгән. Тикшеренеүҙәрҙә 144 кеше ҡатнашҡан, улар 18 йәштән 33 йәшкә тиклем булған. Кемдәр интернетһыҙ тора алмай, уларҙа шунда уҡ 3-4 процентҡа ҡан баҫымы күтәрелгән. Белгестәр тағы ла шуны асыҡлаған: уртаса һәр кем интернетта 5 сәғәт ултырған. Ҡатнашыусыларҙың 20 проценты көн һайын интернет менән 6 сәғәт ҡулланған. Интернет үҙенең ауыңа ир-егеттәрҙе лә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла эләктерә икән. Улар күбенсә социаль селтәрҙәрҙә, интернет магазиндарҙа "ултыра".

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Исламда кеше тормошоноң барлыҡ яҡтарын күҙ уңында тотҡан әҙәп ҡағиҙәләре һәм нәсихәттәр бар. Шәхес булып үҫешер, кешеләр менән аралашыуҙы яҡшыртыр өсөн кәрәк ул ҡанундар. Һис шикһеҙ, бындай ҡағиҙәләр, нәсихәттәрҙе ҡулланыу кешенең холҡон камиллаштыра, яҡшы һыҙаттарын нығыта, аралашыуҙа ихласыраҡ итә.**

# АТАЙЫҢ БҮЛМӘҺЕНӘ ЛӘ...

## ишек шаҡымай инмә



Ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу кешенен үҙ иркендә тип аңларға ярамай, уны, һис шикһеҙ, ҡулланырға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, күп кешеләр иң ябай нәмәләрҙә хата яһай, көнкүрештә күп нәмәгә иғтибар итмәй. Ә был Исламдың камил һәм күркәм булырға тейеш әхлаҡ нормаларына зыян килтерә. Бәйғәмбәребеҙ юлға сығырға торған сәхәбәләргә быны ни тигән: "Тиҙҙән һеҙ үҙ туғандарығыҙға килеп етәсәкһегеҙ. Аттарығыҙҙы, йүгәндәрегеҙҙе, кейемдәрегеҙҙе ҡарағыҙ, таҙалыҡ күҙгә ташланып торһон. Сөнки Аллаһ бысраҡты, тәртипһеҙ һәм насарҙы яратмай!"

Шулай итеп, тәү сиратта мосолман кешеһе үҙенең таҙалығы, кейеменең тәртиптә булыуы, теленең матур, йомшаҡ булыуы менән айырылып торорға тейеш.

● Өйҙән сыҡҡанда ишекте шартлатып ябырға ярамай, сөнки был Ислам ҡанундары менән йәшәгән мосолман кешеһенең ипле булыуына ҡаршы килә.

● Өйгә ингәндә һәм сыҡҡанда бәтәһенә лә "Әссәләмәғәләйкүм вә рәхмәтуллаһи вә бәрәкәтүһ" тип өндәшеү хәйерлерәк. Быны хуп күргән Бәйғәмбәр ҙә Әнәскә шулай тигән: "Улым, үҙ ғаиләңә ингән саҡта барыһын да сәләмлә. Бынан һиңә лә, ғаиләңә лә сауап булыр".

● Әгәр ҙә мосолман кешеһе өйгә ҡапыл ғына ҡайтып инә икән, ул был турала ниндәйҙер ысул менән өйҙәгеләргә белдерергә тейеш. Был тәрлө ғәйеп эҙләгән йә башҡаларҙы насар хәлдә ҡалдырырға теләгән кеше ролендә булмаҫ өсөн эшләнә. Абдуллах б. Ахмад б. Ханбаль шулай һөйләгән: "Минең атайым мәсеттән ҡайтырға булһа, ҡайтыуы тураһында барыбыҙға ла аяҡ тауыштары ярҙамында йә йүткереп белдерә торғайны". Бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Арағыҙҙан кемдер өйҙә оҙаҡ булмаған икән, төн уртаһында ҡайтыуҙың бер мәғәнәһе лә юҡ".

Бар ғаилә ағзалары ла бер бүлмәлә булһа, өйгә инеүсе уларға инеү өсөн рөхсәт һорарға тейеш. Был ҡанун барыһы өсөн дә тигеҙ: балалар өсөн дә, ололар өсөн дә. Имам Малик "Муватта" тигән китабында шулай тип яҙа: "Бер кеше Бәйғәмбәрҙән һорай, ти:

- Әсәйгә инер өсөн рөхсәт һорарға кәрәкме?

- Эйе. Әсәйгә барғанда инергә рөхсәт һора.

- Һуң мин бит уның менән бер өйҙә йәшәйем! - тип аптыраған кеше.

- Рөхсәт һора.

- Мин бит уға ярҙам итәм.

- Рөхсәт һора. Һинең бит уны кәрәкмәгәнсә ҡиәфәттә күргең килмәй?

- ??? ???.

- Шулай булғас, рөхсәт һорарға кәрәк...

Мосолман кешеһе үҙенең туғандарына, дуҫтарына, таныштарына килгәндә, ишеккә шым ғына итеп шаҡырға һәм хужаларҙың хәлдәренә тиңләшмәҫкә тейеш.

Бер ҡатын, Әхмәд Ханбалиға килеп, ишегенә бик ныҡ итеп шаҡыған. Әхмәд Ханбали өйөнән сығып, ҡатынға: "Былай итеп насар уй менән килгәндәр генә шаҡый", - тигән.

Сәхәбәләр Бәйғәмбәрҙең ишеген бармаҡ осо менән генә шаҡый торған булған, ти. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Ысынлап әйткәндә, йомшаҡлыҡ, наҙлылыҡ, нимәлә генә күренмәһә лә, кешене биҙәй, уның юҡлығы - насарлай".

Ишеккә бәләкәй генә тәнәфестәр менән шаҡырға кәрәк. Өйҙәге кеше был ваҡытта эшләгән эшен тамамлап өлгөрөргә тейеш (намаҙ уҡыу, тәһәрәт алыу, ашау). Ишеккә өс тапҡыр шаҡығас та хужа асмаһа, тимәк, ҡунаҡ китергә тейеш. Бәйғәмбәр шулай тигән: "Рөхсәтте өс тапҡыр һорарға кәрәк, рөхсәт итһәләр - ин, итмәһәләр - кире ҡайт".

Инергә рөхсәт һорағанда ишек тапҡырында түгел, унан уңғараҡ йә һулғараҡ торорға кәрәк.

Ишек шаҡығандан һуң "Кем?" тип һорайҙар икән, "шундай-шундай кеше" тип яуапларға түгел, теүәл үҙеңдең исемеңде атарға кәрәк. "Был - мин", тиеү ҙә хужаға бер ни ҙә әйтмәҫ. Хужа һине тауышыңдан танып белер, тип тә өмөт итергә кәрәкмәй, тауыштар бер төрлө лә була ала.

Бәйғәмбәр "мин" тигән яуапҡа ыңғай ҡарамаған, сөнки бындай яуап бер ни ҙә аңлатмай. Сәхәбәләре шундай хәҙисте миҫал итеп һөйләй: "Бер ваҡыт мин Бәйғәмбәрҙең ишеген шаҡыным. "Кем унда?" тип һораны ул. "Мин", тип өндәшкәйнем, яуабым уға оҡшаманы..."

Әгәр ҙә кеше ҡапыл ғына килеп, хужа уны ҡаршылай алмай икән, ҡунаҡ үсекмәһен. Имам Малик әйткәнсә: "Һәр сәбәпте лә аңлатып булмай".

ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР



# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

### Ҡарғыш

Йылы һүҙ ишетеү - рәхәт, яман һүҙ ишетеү - ауыр.
Алғыш алған - аман, ҡарғыш алған - яман.
Кеше һүҙе кеше үлтерә, ти халыҡ.
Халыҡ хаҡ әйтә: һүҙ үлтерә лә, терелтә лә ала.
Алама һүҙҙең касафаты яман.
Ҡарғыш йөрәктәрҙе яралай, йыш ҡына үҙенә әйләнеп тә ҡайта.

Ҡарғышҡа ҡаршы ҡалҡан да ҡуялар:
"Ҡарғышың - ҡара башыңа!" - тиҙәр.
"Ауыҙыңдан ел алһын, илтеп үҙ ҡуйыныңа һалһын!" - тип теләйҙәр.

Ҡалҡан-теләк йыш ҡына ҡабул була - ҡарғыш кешенең үҙ башына төшә.

Ҡарғыштан кеше үҙе ҡара яна, зәхмәте кешене зарарлай.

Был аҡылды күптәр, бигерәк тә ҡарғағандар үҙҙәре беләләр. Ҡарғыш менән уйнарға ярамағанды үҙем һынап беләм. Бер ҡисса ишеткәнем бар: "Борон бер хан халыҡ араһына сыҡҡанда аҡһаҡал аҡыл эйәләренә, сәсәндәргә бүләктәр биргәндә, әллә абайламай, әллә юрый, сәсәндәрҙең береһенә бирмәй ҡалдырған. Быға үпкәләгән сәсән бышылдап ҡына ҡарғыш һүҙе ысҡындырған. Быны хан ишетеп алған да яңылышҡанын аңлап, ғәфү үтенгән. "Үтендең ни, үтенмәнең ни, хан, ауыҙымдан сыҡты, үтте-китте инде", - тигән быға сәсән. Оҙаҡламай хан ханлығынан яҙған, үпкәләгән сәсән доға, дауа һүҙҙәре менән хандың ғүмерен саҡ һаҡлап ҡала алған, ти. Ҡарғыш менән һаҡ булырға кәрәк шул.

Экстрасенстар раҫлауынса, ҡарғыштың тағы бер яман яғы шунда икән, ул ҡарғалған кешенең үҙенә төшмәһә, аҙаҡ шуның балаларына, хатта балаларының балаларына килеп ҡағылыр касафаты ҡала, ти. Донъянан үткәндәрҙең ҡарғышын, гонаһын яңы быуындар юҡҡа сығарһынсы! Нәҫелдән-нәҫелгә килер сырхауҙар, алама ҡылыҡтар, ғәрип тыуыуҙар, һыныҡ яҙмыштар тиктәҫтән тиһеңме ни?

Атаҡлы экстрасенс С.Н. Лазаревтың "Диагностика кармы" тигән китабын уҡыйым да кеше рухын һауыҡтырыуҙың ни тиклем мөһимлегенә, ҡеүәтенә тағы бер тапҡыр аптырап ҡуям. Ғүмер буйы шулай рухыбыҙҙы тәрбиәләй һәм һауыҡтыра алһаҡ икән, ҡарғыштар түгел, гел алғыштар ғына ишетеп йәшәр инек.

Эт ҡарғышы бүрегә төшмәҫ, тиҙәр.
Хаҡһыҙ ҡыйырһытылғандыҡы бушҡа үтмәҫ, тиҙәр.
Ҡарғыш - ҡара йәшен ул, уның менән уйнамағыҙ.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Әгәр булмышығыҙҙы тапһағыҙ: иртән будильникһыҙ ҙа ырғып килеп тораһығыҙ һәм көндөҙ ял итеп алыу мохтажлығы юҡ; эшең менән бер бөтөнгә әүерелеп, ваҡыт тойғоһон юғалтаһың.*



ӘҘИП һҮҘЕ

# ЙӘМҒИӘТЕБЕҘ НИНДӘЙ - МАТБУҒАТЫБЫҘ ШУНДАЙ

**(Башы 11-се биттә).**

**➔ Журналист үҙ заманынан азат була аламы?**

- Ул үҙенең заманынан азат була алмай, әммә киләсәкте күҙалларға тырышырға тейеш. Рәми Ғарипов тиккә генә: "Беҙ - үҙ хәбәрсеһе киләсәктең!" - тимәгән бит. Йәғни, ниндәйҙер ваҡиғаны тикшерә, һүрәтләй икән, уны ул киләсәк күҙлегенән сығып өйрәнергә тейеш. Әйтәйек, был ваҡиға бөгөн ошолай, иртәгә нисегерәк буласаҡ? Ошоларҙы күҙаллаһа, ул, әлбиттә, төплөрәк материал әҙерләй һәм үҙ заманынан күпмелер дәрәжәлә азат була ала, тип әйтергә мөмкин. Сөнки ул киләсәк күҙлегенән сығып эш итә, үҙен бөгөнгө менән генә тышауламай. Шуға ла, киңерәк, иркенерәк фекерләй. Шул уҡ Рәми ағайҙың эше һүҙенән айырылмаған, шуға ла ул телдең ни тиклем мөһимлеген дә аңлаған, шуның өсөн көрәшкән дә, был көрәш уға көс тә биргән. Тел, ысынлап та, көнүҙәк, ысынбарлыҡ тыуҙырған проблема, ниндәйҙер уйлап сығарылған түгел.

Журналист күпмелер дәрәжәлә тикшеренеүсе булып, ғалим, фән кешеһе һымаҡ сығыш яһай. Теге йәки был фактты "тере" килеш береү менән генә сикләнә алмай. Ысын мәғәнәһендәге һөнәрмән икән, мөһим булған хәл-күренештең төбөнә төшә, асылын асыҡлай. Нимәне генә алып ҡарама, ул бер бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән бит. Уның кисәгеһе бар, ниндәйҙер тарихи юл үткән. Ә иртәгә нисек буласаҡ - йыш ҡына ошондай һорауға яуап эҙләү мөһим булып сыға. Хәбәрсе һорауҙарҙы башҡаларға бирер алдынан, үҙ-үҙенә биреп, яуаптар эҙләп ҡарағанда ғына бөгөнгөнө нығыраҡ төшөнә бара. Кисәгене, бөгөндө һәм иртәгәне тығыҙ бәйләнештә күҙаллау иһә бигерәк тә мәслихәт. Бындай осраҡта журналист, үҙ заманынан тулыһынса азат була алмаған хәлдә лә, тарихты яҡшы белгәнгә, йәмғиәттең үҫеш логикаһын самалағанға, бөгөнгөнө тулыраҡ күҙаллай һәм уны "Бөгөнгөнөң ҡоло" тиергә тел әйләнмәйәсәк.

**➔ Ә журналист властан азат була аламы?**

- Был, әлбиттә, сетерекле, һәр ваҡыт тыуа торған һорау. Шуның өсөн был проблемаға әлдән-әле әйләнеп ҡайтырға мөмкин. Минең үҙемдең ҡараш шундай: аҡыллы власть журналисты файҙалана белергә тейеш. Нимәлә файҙалана? Әгәр ҙә журналист, ысынбарлыҡты кемгәлер ярайым, тип яҙмай икән, ул бит власҡа ныҡ ярҙам итә. Сөнки ул хәҡиҡәтте асыҡларға булыша. Хәл-әхүәлебеҙ нисегерәк бөгөн? Тәү сиратта нимәгә иғтибар итергә кәрәк? Теге проблема быныһын хәл иткәнсе көтә аламы? Хәбәрсе ябай мәғлүмәтте генә түгел, тап ана шул иң көн үҙәгендәге мәғлүмәттәрҙе мәлендә тапшырырға, эҫе килеш еткерергә ынтыла. Шуның өсөн аҡыллы власть, тәжрибәле власть журналистарҙың эшмәкәрлегенә таяна һәм шуның өсөн уларҙы ҡеүәтләп, бер яҡтан, мөмкинлектәр, шарттар тыуҙыра, икенсенән, ирекһеҙләмәй. Шундай журналистика (ә власҡа яраҡлашып, власты ғына хуплап, уның һәр хәрәкәтен маҡтаған түгел) власҡа ҙурыраҡ файҙа килтерә. Әгәр ҙә власть ҡурҡмай икән, үҙенең креслоһына ғына йәбешеп ултырыуҙы ҡайғыртмай икән, ул тап ошондай дөрөҫлөктө һөйләгән журналистиканы яҡларға, уға эшләргә мөмкинлектәр тыуҙырырға тырышасаҡ. Шул осраҡта ғына журналист үҙенең бурысын да үтәй аласаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минең күҙаллауымса, чиновниктарҙың ҡайһы берҙәре, хатта күпселеге тип әйтер инем, журналистарҙың мөмкинлеген аңлап еткермәй, йә булмаһа, аңларға теләмәй.

Күренеүенсә, журналистиканы белеп файҙаланғанда, күп проблемаларҙы хәл итергә мөмкин. Ысынбарлыҡта иһә, беҙ йыш ҡына ыҫмалаға эләккән ҡош хәлендәбеҙ: суҡышты алалһаҡ, ҡойроҡ йәбешә, инде уныһын бушатһаң, суҡыш яңынан элекке хәленә ҡайта; батҡан аяҡтарҙы нисек алыу тураһында инде, уйларлыҡ та түгел. Йәғни, мәсьәләләр бер-береһе менән шундай ныҡ бәйле: береһен хәл итмәйенсә, икенсеһен ҡуҙғата ла алмайһың, йә өлөшләтә генә сиселеш табаһың. Әйтәйек, тәүге проблема иң мөһимдәрҙән-мөһиме, ти. Ә уны хәл итеү хөкүмәт кимәлендә ҡарар ҡабул ителеү-ителмәүгә бәйле. Һәм әйләнгән һайын шулай килеп сыға: яуаплы урындарҙа ултырған "яуапһыҙ" кешеләрҙең күберәк булыуы арҡаһында проблемалар үҙгәрешһеҙ ҡала бирә.

**➔ Һеҙ оҙаҡ йылдар йәш журналистар әҙерләйһегеҙ. Бөгөнгө йәш журналистарға нимә етмәй?**

- Әлбиттә, йәштәрҙә тормош тәжрибәһе аҙыраҡ. Шуға мин уларҙа тормош тәжрибәһенең аҙлығына ул тиклем баҫым да яһамайым. Уйлауымса, йәш кешегә тәү сиратта үҙенең граждандлыҡ позицияһын булдырырға кәрәктер. Йәғни, ул үҙен шәхес итеп һиҙергә тейеш. Тормошта, һөнәре буйынса үҙ урынын табыу өсөн ныҡышмал эҙләнергә, эшләргә тейеш. Нисегерәк? Замандан артта ҡалмайым тиһәң, ғүмереңбуйына уҡырға тура килә. Уҡыуҙы парта артында, йәиһә китап, гәзит, журнал уҡыу тип кенә ябайлаштырырға ярамай. Үткәндәрҙе белергә, көндәлек тормоштан хәбәрҙар булырға, һөнәрмәндәрҙең тәжрибәһен ентекләп өйрәнергә. Йәмғиәт нисегерәк үҫешә, ҡайҙа табан бара? Һайлап алған һөнәрең буйынса әҙме-күпме күҙаллауҙарың бар икән, һин артабан анализ менән шөғөлләнергә тейешһең: башҡалар нисек эшләй, ә ни өсөн улар шулай эшләй? Йәғни, йәш кеше үҙенә-үҙе һорауҙар ҡуйырға тейеш. Шул осраҡта ғына уның тормошто күҙаллауы ла формалаша, аңы ла үҫешә. Ул үҙендә тыуған һорауҙарға үҙе яуаптар эҙләп ҡараһын. Әйтәйек, мин ҡайһы берҙә журналист булараҡ һорауҙар бирәм икән, минең үҙемдең яуабым бар. Ләкин миңә башҡаларҙың нисек яуап биреүе ҡыҙыҡ. Шуның өсөн журналист үҙенә үҙе яуаптар эҙләй, унан башҡаларҙың ҡарашын белергә тырыша.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, дөйөм алғанда, беҙҙә уҡыу кимәле, уҡыу сифаты төшә бара. Күпселек уҡыуға еңелерәк ҡарай. Ә бит тикмәгә генә белем алыуҙы ата-бабаларыбыҙ энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиңләмәгән. Мин "йәштәр бөтөнләй икенсе", тип әйтергә теләмәйем. Уларҙың араһында замандан алда атлағандары ла бар. Ләкин улар күп түгел. Ҡайһы берәүҙәр диплом алыу өсөн генә уҡый, диплом алғандан һуң журналистика менән шөғөлләнмәйәсәк.

Йәштәрҙең күбеһе компьютерҙы, программаларҙы яҡшы белеүенә һылтанып, үҙҙәрен алдынғы ҡарашлы, "бөтәһен дә яҡшы белеүсе" тип иҫәпләй. Был - ҡоралды белеү генә бит әле. Ул ғына етмәй. Хатта был ҡоралды ла ижади ҡуллана белер кәрәк. Бит бер үк операцияны әллә нисәмә төрлө юл менән эшләргә мөмкин. Шуны иҫәпкә алып, мин, студенттарға талап ҡуйғанда, аныҡ даталарҙы (киң билдәлеләрен, тотош осорға йоғонто яһағандарын белергә кәрәк, әлбиттә), шәхестәрҙе, ниндәйҙер сығанаҡтарҙы түгел, ә тәү сиратта, ниндәй генә проблема булмаһын, уларҙы хәл итеүгә ижади килеү һыҙаттарын үҫтерергә тырышам. Ябай ғына һорауҙарға яуап эҙләгәндә лә ҡалыплашҡан яуап табалармы, йә көтөлмәгән фекер әйтәләрме - иғтибарға алам. Ошонан сығып, йә хуплайым, дәртләндерәм, йә хатаһын аңлатып, кәңәштәрҙе еткерәм.

Тормош тәжрибәһенән сығып шуға инанғанмын: эшенә ижади ҡараған һөнәрмән генә заманынан артта ҡалмаясаҡ, эшенән дә, йәшәүенән дә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Билдәле шағир, ҡәләмдәштәренә бик талапсан Мәүлит Ямалетдин, Фәнил Күзбәковтың төрлө яҡлы ижадын баһалағанда, шундайыраҡ фекер үткәргәйне: "Тәнҡитсе Фәнил, әйтеп-әйтеп тә эш сыҡмаһа, шиғырҙы үҙе яҙып күрһәтә". Уның журналистикаға бәйле эшмәкәрлегенә лә был ҡараш тап килеп тора бит. Беҙ уның әҙиптәр менән әңгәмәләрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып барабыҙ. Ҡыҫҡаһы, Фәнил Күзбәковтың Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына тәҡдим ителеүе лә урынлы һәм бәхәсһеҙ.**

**Иҙел РӘХИМОВ**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Яратҡан эш менән шөғөлләнеү - тимәк, тропик пляжда ҡыҙынып ятыу түгел, ә алдыңа ҡуйған маҡсатыңа өлгәшеү өсөн барлыҡ дәртеңде, һөйөүеңде, энергияңды, креативлығыңды һалыу ул. Яратҡан эшең менән шөғөлләнеү, тимәк, хәүефкә барыу. Ҡағиҙә булараҡ, был һуңынан һине аҫыраһын өсөн хыялыңды тормошҡа ашырырға тырышыуҙы аңлата. Бында билдәһеҙлек һәм хәүеф тә бар. Ауырлыҡтарһыҙ тормош буш кеүек. Шуға күрә байҙарҙың балалары бик йыш наркотиктарҙы артыҡ ҡулланып йәки атылып үлә. Уларҙы артыҡ еңел тормош үлтерә, сөнки эшләһәләр ҙә, эшләмәһәләр ҙә барыһы ла бар. Барлыҡ ҡарарҙарығыҙ өсөн үҙегеҙгә тулы яуаплылыҡ алғанда ғына тормошоғоҙ уңышлы булыр. Бындай ҡарарҙар исемлегенең башында булмышыңды һайлау тора.

**Әгәр нимә менән шөғөлләнергә теләгәнемде белмәһәм?** Тимәк, күптән инде үҙ-үҙебеҙҙе тыңламайбыҙ. Күптәребеҙ туғандарыбыҙға ярау өсөн үҙе булыуҙан баш тарта... Шул тиклем бейсбол уйнағы килә, әммә әсәй фортепианола уйнарға мәжбүр итә. Журналист булғым килгәйне, әммә бухгалтерлыҡҡа уҡыным. Сәйәхәт итеү тураһында хыялландым, әммә ялдарымды һәр саҡ ауылда үткәрҙем. Бына шулай, ғүмер буйы кемгәлер яраҡлашып йәшәргә тура килә. Даими рәүештә үҙеңдәге көслө теләкте баҫып килгәндә, ниндәйҙер мәлдә нимә теләгәнеңде, һиңә нимә оҡшағанын да аңламай башлайһың. Эске тауыш: һин теләгән ғәмәл - ул эгоизм, тип тылҡып торасаҡ. Хатта ул: "Эшеңде яратмайһың, шул кәрәк һиңә!" - тип тә белдереүе ихтимал. Бынан тыш, башҡалар ниндәйҙер шөғөлдө һеҙгә тап килеүе ихтимал булған өсөн генә үҙегеҙгә тап килергә тейешлеге тураһында уйлай башлайһығыҙ. Был осраҡта шуны онотмағыҙ, әгәр булмышығыҙҙы тапһағыҙ: иртән будильникһыҙ ҙа ырғып килеп тораһығыҙ һәм көндөҙ ял итеп алыу мохтажлығы юҡ; эшең менән бер бөтөнгә әүерелеп, ваҡыт тойғоһон юғалтаһың; сарыф иткән көсөң хаҡында уйланмайһың, уның тураһында сәғәттәр буйы һөйләй алаһың.

**Булмышыңды нисек табырға?** Тормошто ябайлаштырырға кәрәк. Ғәҙәт буйынса йәшәүҙән туҡтарға. Бер нәмә лә ҡамасауламаһын өсөн көн тәртибенән кәрәкмәгән эштәрҙе алып ташларға. Бер ай телевизор ҡабыҙмаҫҡа. Үҙ уйҙарыңа иғтибар итергә, уҡығаныңдың мәғәнәһен аңларға. Үҙеңде тыңларға һәм эске тауышыңдың шым ғына итеп: "Миңә был оҡшай, миңә был ҡыҙыҡ", - тигәнен ишетергә кәрәк. Китапханаға барып, кәштәләр араһында йөрөргә. Ҡарашығыҙ нимәгә төшә, шул китапты алып уҡырға.

Яңы нимәләр башлағыҙ: картина яҙығыҙ, балалар футбол командаһының тренеры булығыҙ, сит телде өйрәнегеҙ. Ун ынтылыштың туғыҙы файҙаһыҙ, буш булһа ла, унынсыһы һеҙҙең алдығыҙҙа ҙур яңы тормош ишеген асыуы ихтимал. Әгәр унынсыһы ла буш булһа, тағы ла унлаған эште һайлап, барыһын да яңынан башлағыҙ. Табыу өсөн эҙләргә кәрәк. Үҙеңә бер ни тиклем ваҡыт һәм азатлыҡ биреп, тормошта үҙегеҙ өсөн нимә мөһим икәнлеген асыҡлағыҙ. Яңғыҙ ғына тауҙарға китегеҙ. Иң мөһиме - оҡшаған нәмәне эшләргә теләүеңдән оялмаҫҡа, яратҡан эшең менән шөғөлләнеү өсөн быны ысынлап та мөмкин икәнлегенә ышанырға кәрәк. Ҡыҫҡаһы, күптәр үҙенең нимә теләгәнен белмәй. Аныҡ ҡына белмәһәгеҙ, берәй оҡшаған нәмә табығыҙ һәм шул ҡыуаныстан бейегеҙ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МӘЛӘҮЕЗ РАЙОНЫ ТӘБИҒӘТЕ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**33-сө һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Өйәҙе. Әрәсә. Еңмеш. Баҡта. Тамаҡ. Ҡамфара. Назарат. Урман. Исланд. Ыҡсым. Оле. Сатый. Тәкә. Ажар. Ғәмәл. Агния. Ирҙә. Тангенс. Табын. Кенгуру. Йәннәт.

**Вертикаль буйынса:** Нарыҫтау. Бизнесмен. Ритм. Аят. Әхәт. Акакий. Актив. Өмәсе. Округ. Етегән. Мифтахетдин. РСФСР. Етмеш. Ут. Тау. Сәғәт. Рита. Ассы. Ҡон. Йылан.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 сентябрь "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+

**29 сентябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 сентябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**28 сентябрь "Акса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 сентябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+.

**24 сентябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен). Башлана 12.00, 14.00 0+

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ИҪКӘРТЕҮ ЯҠШЫРАҠ



**Башҡортостанда талпан инфекциялары менән зарарланыу хәүефе дауам итә. Көҙ етеүе лә талпандарҙың әүҙемлеген кәметмәне.**

БР буйынса Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөнгө көнгә 11 мең кеше медицина ярҙамына мөрәжәғәт иткән. Бындай осраҡтар Ҡыйғы, Балаҡатай, Дыуан, Асҡын, Салауат, Учалы, Бөрө, Ҡалтасы, Ауырғазы, Ҡариҙел, Мишкә, Туймазы райондарында күберәк теркәлгән.

Талпан вируслы энцефалиты диагнозы 20 осраҡта раҫланған, талпан боррелиозы осрағы - 29. Шулай ҙа ведомство хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, талпан энцефалиты былтырғы менән сағыштырғанда, ике тапҡырға кәмерәк һәм күп йыллыҡ уртаса күрһәткестәрҙән артмай.

Санитар табиптар профилактика тураһында тағы бер тапҡыр иҫкәртә. Көҙ вакцинация башлана. Тулы курс өс прививканан тора: беренсеһе - көҙ, икенсеһе - бер айҙан йәки ярты йылдан, өсөнсөһө - бер йылдан һуң. Һуңынан 3-4 йыл һайын йәшәгән урығыҙ буйынса поликлиникаға мөрәжәғәт итеп, ҡабаттан прививка яһата алаһығыҙ. Тәбиғәттә булғанда репелленттар ҡулланырға, талпандан һаҡлаусы кейем кейергә, кейемде һәм тәнде ваҡыты-ваҡыты менән тикшереп торорға кәрәк.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (5) дүшәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 17:35 | 19:05 | 20:35 |
| 26 (6) шишәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:32 | 19:03 | 20:32 |
| 27 (7) шаршамбы | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 28 (8) кесе йома | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 29 (9) йома | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |
| 30 (10) шәмбе | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:23 | 18:53 | 20:23 |
| 1 (11) йәкшәмбе | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БИСМИЛЛӘНЕҢ САУАПТАРЫ

Һәр эштең башында "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим"ды әйтергә кәрәк. Мөхәммәт өммәтенең бер рәкәғәт намаҙҙарының сауабы ғәйре өммәттәрҙең мең рәкәғәт сауабына тиңләшер, бәлки артығыраҡ та булыр.

Аллаһы Тәғәлә әйтер: "Сөнки Мөхәммәт өммәтенең намаҙҙарында "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим" тигән һүҙ бар. Ғәйре намаҙҙарында юҡтыр".

Кеше ашарға ултырһа, ул кеше менән бергә шайтан да ултырыр. Шайтан да шул кеше менән ашар - әгәр ҙә ул ултырғанда һәм ашағанда "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим" тип әйтмәһә. Әммә "Бисмиллә" әйткән кешеләрҙән ҡасыр.

"Бисмилләһир-рахмәнир-рахим", тип өйөнә, һарайына, мунсаға, малдың эргәһенә, баҡсаңа йәки башҡа урындарға кергәндә, ултырғанда, ятҡанда, торғанда әйтмәк кәрәк, был осраҡта шайтан һиңә эйәрә алмаҫ, был кеше миңә юлдаш түгел, тип, ҡасыр.

Эскән ваҡытта, һәм шуның кеүек, ятҡан-торған ваҡытта һәм шулай уҡ ҡатыныңа яҡынлыҡ ҡылғанда ла "Бисмиллә" тип әйтергә кәрәк, "Бисмиллә"не әйтмәһә, кеше менән шайтан бергә булыр һәм ул эшләгән эштәрҙе шайтан да эшләр.

Ҡасан атҡа атланһаң, машинаға ултырһаң, "Бисмилләһир-рахмәни-рахим" тип атлан йә ултыр. Атланған атыңдың аҙымдары һанынса изгелек яҙылыр, юлың бәлә-ҡазаһыҙ булыр.

Берәй кеше "Бисмилләһир-рахмәни-рахим" тип яҙған ҡағыҙҙы, ололап, ерҙән йәки башҡа ҡәҙерһеҙ урындан алып, хөрмәтләп, ҡәҙерләп тотһа, Аллаһы Тәғәлә уны дуҫтарынан һанар, ата-әсәһе боҙоҡ гонаһлы булып вафат булған булһалар ҙа, Аллаһы Тәғәлә уларҙың ғазаптарын еңел итер.

Кем дә кем "Бисмилләһир-рахмәни-рахим"ды даими әйтеп йөрөһә, ул кеше утта янмаҫ, һыуҙа ла батмаҫ, уны йылан-саян саҡмаҫ һәм ағыуҙар зарар итмәҫ.

✓ *Кәкре ҡайында ҡар ятмаҫ, йүнһеҙ кешелә һүҙ ятмаҫ.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# ӘСӘЙ БУЛЫУ...

## иң мөһим эш



**Бик әүҙем, нәҙәкәтле, сибәр актриса ул. Халыҡта уның кеүектәрҙе, ут бөрсәһе, тип йөрөтәләр. Әле генә киноға төшөп йөрөй, бер ҡараһаң, театрҙа матур геройҙары менән һоҡландыра. Стәрлетамаҡ театрының популяр телевизион проекты - "Күңелле йәшәйбеҙ"ҙең халыҡсан юморға ҡоролған сюжеттарын яҙыуға ла уның "ҡулы" тейеп өлгөрә. Башҡорт йәмғәтселегендә булған һәр ваҡиғаға үҙенең нигеҙле фекере бар. Рубриканың бөгөнгө ҡунағы - Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт театры артисы Зиләрә ЮЛТАЕВА һорауҙарыбыҙға яуап бирә.**

**Стәрлетамаҡ театры, тимәк, артистар, һеҙ ҙә, яңы миҙгелдә тамашасыларға ниндәй "күстәнәстәр" әҙерләйһегеҙ?**

- Быйылғы йылдың ахырына тиклем пландар билдәләнгән һәм беҙ күп эштәр башҡарырға ниәтләнеп тораbыҙ әле. Тамашасыларыбыҙға төрлө-төрлө сараләр, әкиәттәр тәҡдим итмәксебеҙ. Йолаларыбыҙҙы тергеҙеү, туған телебеҙҙе үҫтереүгә йүнәлтелгән "Башҡорт телен өйрәнәм" тип аталған һәм уйындарға ҡоролған яңы проект үҙенсәлекле булмаҡсы. Яңы ғына "мейестән" сыҡҡан ҡыҫҡа метрлы фильм менән дә ҡыуандыраcаҡбыҙ. Әлеге мәлдә ике спектакль өҫтөндә эшләйбеҙ. Режиссер Антон Федоров Мостай Кәримдең "Өс таған"ын һәм режиссер Зиннур Сөләймәнов Гарсия Лорканың "Бернарда Альба йорто" әҫәрен ҡуя. Репетициялар араһында республикабыҙҙың ауыл-ҡалаларына, шулай уҡ Краснодар яҡтарына гастролдәр билдәләнгән. Тағы ла Санкт-Петербургтан бер режиссерҙы көтәбеҙ. Театрыбыҙҙың репертуары тулыланып, яңы һулыш, боролош алып китер, тип ышанабыҙ. Актриса булараҡ, үҙемдә милли драматургиянан тыш, сит ил, рус яҙыусылары пьесаларындағы образдарҙа ҡарауы ҡыҙыҡ. Эксперименттар яратам, үҙемдә төрлө жанрҙарҙа үҫтергем килә. Ҡыҫҡаһы, Яңы йыл байрамына тиклем 6 төрлө спектакль сығарырға тейешбеҙ. Эш ҡайнай, ҡул ҡаушырып, күңелһеҙләнеп ултырырға телә тә, ваҡыт та юҡ.

**Театрҙа һәм кинола берҙәй әүҙем эшләгән актриса булараҡ, уларҙың ҡайһыһы күңеленә яҡыныраҡ?**

- Кино ла, театр ҙа икеһе лә яҡын, ике лә оҡшай, ике йүнәлеш тә мауыҡтырғыс. Үҙен артабан үҫтерергә, камиллашырға теләгән актер унда ла, бында ла өлгөрөргә тейештер. Беренсе төшкән фильмым "Сәк-сәк" ине. Уга төшкән ваҡытта ирем - кинорежиссер Руслан Юлтаев менән танышыҡ та инде. Һунынан, өйләнешкәс, уның менән "Күңелле йәшәйбеҙ" телепроектын уйлап таптыҡ, унда ла һирәкләп булһа ла төшә инем. Артабан "Бәхет ҡошо" һәм "Сируси" сериалдарында ла ролдәр башҡарҙым. "Өс хат"та Хазинаны уйнаным. Әйткәндәй, "Өс хат" фильмының кинофестивалдәрҙә йыш ҡына төрлө номинациялар яулауына, уның кино сәнғәте тәнҡитселәренә лә оҡшауының сере ябай. Йөрәктән сыҡҡан йылылыҡты, ихласлыҡ һәм йән әрнеүен бергә ҡушып, 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында беҙ тип йәнкәйҙәрен биргән олатай-атайҙарыбыҙға, тыл ветерандарына рәхмәт йөҙөнән, һуғыш һәҙәмтәһендә күпме тыумаған балалар тураһында һыҙланып төшөргәйнек беҙ уны. Был бөтөн илдең һәм ер шарының уртаҡ ҡайғыһы. Был тема барыбыҙға ла яҡын булғанғалыр, фильм ныҡ тәьҫораттар уята һәр кемдә. Уны хатта күп кенә сит илдәрҙә лә күрһәттеләр.

**Әлеге мәлдә актриса Зиләрә Юлтаева ниндәй башланғыстар менән янып йөрөй?**

- Театр актрисаһы булараҡ, режиссер Айҙар Зариповтың Мөнир Ҡунафин әҫәре буйынса сәхнәләштергән "Люксембургҡа барып ҡайтҡансы" спектаклендәге Гөлнәзирә роле өсөн "Театр яҙы" IX Республика фестивалендә "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" тигән номинация ҙур ижади стимул бирҙе. Үҙемә ышаныысым артты, илһам уянды. Бының өсөн фестивалгә, уны ойоштороусыларға, баһалаусыларға һәм, әлбиттә, коллективыма рәхмәтлемен.

Шулай ҙа мин ир ҡатыны, балалар әсәһе булыуымды профессиональ һөнәремдән өҫтөнөрәк ҡуйырға тырышам. Һәр нәмәнең үҙ мәле, ролдәр ҙә булыр, иң мөһиме, балаларыбыҙ һау ғына булһын. Улым быйыл Башҡорт гимназияһына икенсе класҡа барҙы, көн дә тиерлек икешәр "бишле" тейәп ҡайта, Аллаға шөкөр, бына ошонон менән бәхетлебеҙ. Ҡыҙым, үҙем кеүек, бейергә, кемдәрҙелер әләкләргә ярата. Уны беҙ, бәләкәй актрисабыҙ, тип йөрөтәбеҙ. Ҡылана инде үҙенсә, күҙгәнөң тотмаған ерен ҡалдырмай - бына был бәхет түгелмe!

Киләсәктә Башҡортостаныбыҙ төрлө яҡлап нығынып үҫешеп китер, тип өмөт итәбеҙ, бының өсөн бар тырышлығыбыҙҙы һалабыҙ. Милли сәнғәт тә ҡайһы бер үҫешкән илдәрҙәге кимәлгә күтәрелер, бөтөн донъяла хөрмәт яулар. Шуға зарланмайыҡ, ә ҡулыбыҙҙан килгәндең барыһын да эшләйек, тим.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

АФАРИН!

# ҠУРАЙ ИТТЕ ХАЙРАН



**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солистары "The Spirit of Desht-I-Kipchak" Халыҡ-ара этник мәҙәниәттәр фестиваль-конкурсында уңышлы сығыш яһаны.**

Бөйө Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанала үтте. Унда донъяның 37 иленән 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашты. Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсыһы Ишморат Илбәков "Инструменталь башҡарыу" номинацияһында I дәрәжәләге диплом менән бүләкләнде. Ул башҡорт халыҡ йыры "Баяс"ты һәм "Япурай" тип аталған боронғо ҡаҙаҡ көйөн ҡурайҙа башҡара. Был номинацияла Гран-приҙы Ҡаҙағстан ансамбле, икенсе урынды Үзбәкстан, өсөнсө урынды Америка Ҡушма Штаттарынан ҡыл-ҡубыҙсы ала.

Филармонияның солисы Әлфиә Ғәлләмова "Вокал" номинацияһында сығыш яһай һәм конкурстың дипломанты исеменән лайыҡ була. Был йүнәлеш буйынса Гран-при итальян йырсыһына эләгә, беренсе урынға Ҡырғыҙстан йырсыһы сыға. Икенсе урынға Венгрия йырсыһы лайыҡ тип табыла, ул думбырала уйнап, ҡаҙаҡ йырын башҡара. Өсөнсө урында - Төркиәнең опера йырсыһы.

"The Spirit of Desht-I-Kipchak" Халыҡ-ара этник мәҙәниәттәр фестиваль-конкурсында төрлө йылдарҙа Башҡортостандың сәнғәт оҫталары сығыш яһай. Ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов Гран-при яулай, ә Әлфиә Кәримова дипломант була.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛӘГЕНДЕ АЛҒА СЫҒАРМА,

## маҡсат ҡуйып йәшә

Кәкре ҡайында ҡар ятмаҫ, йүнһеҙ кешелә һүҙ ятмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ тормош китабының бер генә битен дә йыртып ырғыта алмайбыҙ, ә бына китапты тотош килеш утҡа ырғытыу бер ни тормай.

**(Жорд Санд).**

Ах, үҙ хаталарында ситтән тороп ҡына өйрәнһәң икән!

**(Борис Крутиер).**

Һәр көн бәләкәй генә тормош ул: һәр иртә - бәләкәй генә йәшлек, һәр кис йоҡоға әҙерләнеү - бәләкәй генә үлем.

**(Артур Шопенгауэр).**

Кеше иненә ауырлыҡ күтәрткәндә ярҙам ит, төшөргәндә ярҙам итмә.

**(Пифагор).**

Ғүмер аҙағында ғына һинең бар тормошоң ғилем эстәү менән үткәнен, ә һин унда иғтибарһыҙ уҡыусы булғаныңды аңлайһың.

**(Василий Розанов).**

Әйе, сәйәсмәндәр ябай кешеләргә күп иғтибар бүлә, ләкин изгелекле булғандан түгел был. Эттәр ҙә бит тәнендәге бөрсәләренә күп иғтибар бүлә.

**(Патрик О'Рурк).**

Рухи аҙыҡ менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһоноп бармай.

**(Лев Толстой).**

Идея ҡоло булыу - ул идеяны ла, үҙеңде лә һәләк итеү.

**(Авентус).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һуҡырайыр алдынан ҡуҙҙәр хатта сәс осондағыһын да күреп өлгөрә.**

**Һаңғырауланыр алдынан ҡолаҡтар хатта бәләкәй ләпәкәйҙәр осҡанын да ишетеп өлгөрә.**

**Тәм тойғоһо тупаҫланыр алдынан тел бер ҡоҙоҡтоң һыуын икенсеһенән айыра ала.**

**Еҫ тойғоһон юғалтҡанға тиклем танау янған агас еҫенән серек агас еҫен дә айыра ала.**

**Тәне ҡатып ҡалғанға тиклем кеше тиҙ йүгереүҙең ни икәнен белергә өлгөрөп ҡала.**

**Аҡылын юғалтҡанға тиклем кеше йөрәге ялғандан дөрөҫлөктө бик тиҙ айыра ала.**

**Быларҙың сәбәбе шунда: бер сиккә барып етмәйенсә, әйберҙәр ҡапма-ҡаршы әйбер хәленә күсә алмай".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирҙәр:**
*Ләйсән НАФИҠОВА, Зөйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.*

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тираж - 4677
Заказ - 1929/09